*Барый НОҒОМАНОВ*

# ҒҮМЕРҘӘР БАЛҠЫШЫ

*Роман*

## Гөл-баҡсала әсә һыны

Быуындан быуынға күсә килгән тормош ағышы үҙ юлында ниндәй генә тарихи ваҡиғалар ташҡынын ярып үтмәй?! Мәңгелек ярһыу, шау-шыулы, тынғыһыҙ тормоштоң икһеҙ-сикһеҙ ҡосағында ил яҙмышын иңендә күтәргән ғүмерҙәр балҡышы быуаттар буйына йәшәүен дауам итә.

Бүздәк районының Кәпәй-Ҡобау мәктәбе алдына килеп баҫҡас, бер килке шундай уйҙар солғанышында ҡалдым. Ишек алдындағы гөл-сәскәләр күмгән гүзәл баҡсала күңел түрендә мәңге иҫтә ҡалырлыҡ ике шәхес ҡаршыла違ны. Улар икеһе лә ауылдың, районды, республиканың ғына түгел, киң Рәсәй иленең яҡты йондоҙона тиңдәш заттар булған. Икеһе лә замананың иң ауыр фажиғәле йылдарында һынмаҫ рух сыҙамлығы күрһәткән ил азаматтары. Ике төрлө ике яҙмыш. Икеһенә лә берҙәй оло хөрмәт, дан һаҡлана.

Береһе уның — ҡасандыр ошо мәктәптең уҡыусыһы, Бөйөк Ватан һуғышының ҡурҡыу белмәҫ яугире, Дан орденының тулы кавалеры, һуғыштан һуңғы тыныс тормошта атаҡлы нефтсе, Социалистик Хеҙмәт Геройы Хәтмулла Аҫылгәрәй улы Солтанов. Ауылдаштары батыр яугирҙе мәңгеләштереп, мәктәп алдына күркәм бюст ҡалҡытҡан.

Икенсеһе — халыҡ теленә Герой-Әсә булып ингән, ил инәһе тиңенә торорлоҡ Майкамал Ғабдрахман ҡыҙы Латипова. Ул күркәм стелала һынланып, һәр кемде иҫкәртә төҫлө: «Кешеләрем, ил именлеген, тормош ҡәҙерен уяу һаҡлағыҙ!»

Әсә үҙ ғүмерендә дүрт ҡыйралышты — рус-япон, беренсе бөтә донъя, граждандар, Бөйөк Ватан һуғыштары ғәрәсәттәрен иңендә күтәргән, йөрәк ялҡындары аша үткәргән, илдең ауыр яҙмыштарын күңел түрендә һаҡлаған ябай ауыл ҡатыны. Бөгөн дә, йылдар теҙмәһе арта барһа ла, ҡәһәрле һуғыш тол ҡалдырған, улдары-ҡыҙҙарынан яҙҙырған әсәләрҙең һыҡраныу-ҡайғылары һаман да йөрәктәргә ҡан һауҙыра, уларҙың түҙемлеге алдында бөтә кешелек донъяһы баш эйә.

Майкамал Ғабдрахман ҡыҙы ике ҡыҙ, һигеҙ ул үҫтерә. Фашистар илгә ябырылғас, һигеҙ улы ла утлы өйөрмәгә күкрәк ҡуйып, дошман яуына ҡаршы баҫа. Ватаныбыҙ яҙмышы ҡыл өҫтөндә ҡалған хәтәр мәлдә яугир улдары фронттың алғы һыҙығында йән аямай, үлемгә — үлем, ҡанға — ҡан килеп,

алышҡа ташлана. Һәм... Алты ҡаһарман — Мөхәмәтша, Мөхәмәтзакир, Ғәйнелғилем, Мөхәмәтсафа, Фәтҡелғилем, Ҡәнзелғилем — яу яландарында ятып ҡала. Ҡәшбелғилем һуғышта алған ауыр яраларынан һуң ауылына ҡайтып вафат була. Иң кесеһе — Мөхәмәтйән ағай (1921 йылғы) утлы алыштарҙың уртаһында ҡайнап, яраланып, тыуған йортона әйләнеп ҡайта, үпкәһенә инеп ултырған снаряд ярсығы туҡтауһыҙ өйкәгән хәлдә, оҙон ғүмер кисерә. Ул Әсәнең берҙән-бер таянысы була.

Герой-Әсә һыны күҙ ҡарашымда онотолмаҫ фотоһүрәт һымаҡ һаман да һаҡлана. Уны шиғри юлдарға ла һалып ҡарағаным булды.



...Таш һын һаҡлай изге хәтирә,
Хәтирәне белә бар тирә:
Мәрхәмәтле Әсә бәғере,
Иң хөрмәтле Әсә ҡәҙере!..
Елдәр иҫһә, уйнар аҡ монар,
Япраҡ һиңә хәбәр шыбырлар:
Саба йылдар йылды әбәкләп,
Миҙгел миҙгелдәрҙе әйҙәкләп.
Йылдар оса атҡан туп һымаҡ,
Күҙ астың да йомдоң — юҡ һымаҡ,
Йылдар ҙа бар — аһ-зар өләшкән,
Үтмәй оҙаҡ — ергә һемәшкән.
Һин йәшәнең, Әсә, ялҡында,
Ҡарҙар кистең ыжғыр һалҡында.
Ауыр йөктән иңдәр иңрәне,
Күңел түрен ҡайғы биләне.
Ватан билен тапай фашистар,
Ҡоторған эт хас та — хәсистәр.
Һигеҙ улын Әсә оҙатты
Ил һағына.
Сәсен сал баҫты
Хәсрәттәрҙән...
Ғәзиз улдарын
Көтә Әсә, көтә ул һаман.
Ауҙы быуып дошман юлдарын
Ете улы — ете ҡаһарман!

Миңә, матбуғат хеҙмәткәре булараҡ, республиканың барлыҡ райондарын, ҡалаларын, бик күп ауылдарын бер нисә тапҡыр әйләнеп сығырға тура килде. Журналист юлдары төрлө яҙмышлы кешеләр менән осраштырҙы. Улар ҡайһы бер повестарымда, хикәйәләремдә, очерктарымда сағылыш тапты. Ә иң әрнеткесе — яуыз һуғыш төҙәлмәҫлек яра һалған әсәләр менән осрашыуҙар ине. Ғәзиз ирҙәрен, балаларын һуғыш уты йотҡан әсәләр аҙмы ни әле был донъяла?! Майкамал апайға ҡуйылған стеланы күргәс, тыл һәм һуғыш темаһы күңелемә тынғылыҡ бирмәне, ҙурыраҡ әҫәр яҙыу теләге менән яндым. Әҫәремдең нигеҙендә Майкамал апай һәм уның балалары яҙмышы ятһа ла, бер аҙ әҙәби алымдар ҡулланып, шул замандың фажиғәһен, афәттәрен кисергән кешеләрҙең, әсәйҙәрҙең тормош юлын һүрәтләүҙе маҡсат итеп ҡуйҙым.

## Көҙгө күкрәү

Көҙгө сыуаҡ, йылы нурҙарын бер аҙ һүлпәнәйтә төшһә лә, Ер-әсәнең битен иркәләй-иркәләй тынлыҡҡа сума барған тәбиғәтте уятып, ҡоштар сырҡылдашыуын яңынан ҡуҙғытып, көндө балҡытып ебәрҙе. Ҡояш тирә-яҡҡа йән өргәндәй, хәрәкәт тыуҙырып, халыҡты урамға әйҙәне. Иң тәүҙә ҡапҡа төптәрендә балалар күренде. Оҙаҡламай улар бергә йыйылып, өймәкләшеп, ниҙер уйнарға кереште. Өлкәндәр ҙә, еңелсә генә кейенеп, ихаталарында ниндәйҙер эш-ҡош менән булыша. Бөткәнме ни донъя мәшәҡәттәре: абайлап баҡҡанға ағы ла, ҡараһы ла күренә; тормоштоң үҙ тәртибе: ағы — аҡ яҡта, ҡараһы — ҡараңғыла булырға тейеш.

Хәйер, Мөхәмәтшакир менән Майкамалдың ҡара яҡта бер мөлкәте лә юҡ, бөтәһе лә күҙ алдында: елдереп йөрөр етеҙ алашаһы, һыйыр-башмаҡтары, бер нисә һарығы, тауыҡ-ҡаҙҙары — ғүмер буйы йыйған байлығы шунан ғибәрәт.

Ни тиһәң дә, күҙ терәп, ғаиләнде туйындырған мал-тыуарың булыуы үҙе бер йүнселлек билдәһе бынау ауыр заманала. Хоҙайға шөкөр, баласағаһы ишле булһа ла, ата-әсә уларҙы аҡтан өҙмәне, әҙәм араһында, элмәйтеп, ас-яланғас йөрөтмәне. Балалары ла миһырбанлы — кеше көлдөрмәне, ҡулдары эшкә өлгөр, аяҡтары тилбер.

Мөхәмәтшакир ағай ҡапыл ғына балҡыған көн битенә йөҙ терәп, күңел күтәренкелеге тойҙо. Ихатаһындағы ат арбаһын һелкеткеләп, тәгәрмәс туғындарын тартҡылап сыҡты. Һуңғы бер нисә көндә ваҡ ямғыр тамсылары бысҡаҡлап ерҙе еүешләп торғанға, был арбаға ат егеп сыҡҡаны юҡ ине, бына хәҙер урман тирәһен әйләнеп ҡайтһаң да ярап ҡалыр.

Иренең арба тирәһендә әйләнгеләгәнен шәйләп, Майкамал апай ҙа ҡыҙыҡһынды.

— Әллә берәй ергә йыйынаһыңмы, ҡартым?

— Урман ҡарай сығырға ине, нисек ятмаҡ кәрәк бынау көндө. Утын тейәп ҡайтайым.

— Шулай шул. Анау ваҡыт Мәүлиҙә менән Ҡурғылы урманына муйылға барғанда ҡабыҡтары аҡтарылып олоно буҙырлана башлаған имәндәр күргәйнек. Утын өсөн шәп тә икән тип ҡыҙышҡайным. Мәүлиҙә лә утыны бөтөүгә уфтанды. Сәлисәһе ауырып киткән бит уның, ярҙам итер кешеһе юҡ. Берҙән-бер ҡыҙы зәғиф көйөнсә лә тырыша-тырмаша ине әле. Хәҙер тере ҡулһыҙ ҡалды әхирәткәйем.

Мөхәмәтшакир шунда уҡ ҡатынының тел төбөн аңланы.

— Ҡыҙы ла ауырыймы ни шулай?

— Түшәктә ята, баш та ҡалҡыта алмай.

— Эй, Хоҙай... Яңғыҙ кеше тормошо — илаулаған көн шикелле инде ул. — Мөхәмәтшакирҙың йөҙөндә йәлләү билдәләре сағылды. — Бөгөн үк уларға ла бер йөк утын килтереп ауҙарам.

Иренең кеше йәнле булыуына ҡыуанып ҡуйҙы Майкамал: иртәгәге ике көндән бөгөнгө бер көн яҡшы, итһен әйҙә изгелек, рәхмәте үҙе өсөн.

Ул арала, киң күкрәгән кирә биреп, әзмәүерҙәй һынын турайтып, йүгән тотоп, ире килеп тә сыҡты келәттән. Күҙҙе ҡамаштырған сыуаҡ сатҡыларын баҫыр өсөн, усын маңлайына ҡуйып, һыу буйҙарын байҡаны.

— Ҡайҙа йөрөй минең алаша?

Эргәһендә өйөрөлгән әбейе лә шул яҡҡа төбәлгән.

— Анау һинең атың даһа, ҡарт. Кит, әллә күҙең күрмәй башланы инде? Саҡыр Мөхәмәтйән улыңды, тиҙ генә елдертеп килтерер, — тип кәңәш бирҙе иренә Майкамал.

Йылғыр Мөхәмәтйән үҙенең исемен ишетеү менән йылп итеп атаһы алдына килеп баҫты. Ат тиһәң атлығырға әҙер егет һыу буйына ҡарай йүгерҙе. Оҙаҡламай алаша Ҡурғылыға ҡарай юртаҡлай ине.

Ҡурғылы буйында, ысынлап та, ҡороған имәндәр байтаҡ. Мөхәмәтшакир урман күрке — мөһабәт ағастарға ғәжәпләнеберәк ҡараны. Ни ғәләмәт, ҡапыл ғына ниңә ҡороған былар? Үткән йыл ғына, баһадир һымаҡ, киң ботаҡтарын тарбаҡландырып, ус дәүмәле япраҡтарын шаулатып ултырған имәндәр ине бит. Ниндәй ҡаза елдәре ҡағылып үтте икән? Имән күпләп ҡороһа, ил өҫтөнә бәлә ябырыла, тиеүҙәре ысынға тура килеп ҡуймағайы тағы...

Мөхәмәтшакир үткән ҡыштың үтә һалҡын килеүен, бөтә тәбиғәтте, хатта ерҙең үҙен дә үҙәк өҙгөс зәһәрлек ҡороштороғанын онотмағайны. Осоп барған ҡоштарҙың туңып ергә тәгәрәгәнен, өң алдында ҡуяндарҙың боҙҙай ҡатҡанын үҙ күҙҙәре менән күргәйне. Ауыл кешеләренең ҡайһы берҙәренә зыян да килде — ҡаҡ аҙбарҙа ятҡан малдары аяҡ һондо. Ярай әле өйҙәре иркен, һыйырын төнгәләккә индереп ҡотолдо был ғаилә. Бына шул ҡыштың ғәрәсәте имәндәргә лә ҡағылған, ахырыһы. Имән ныҡ кеүек күренһә лә, самаһыҙ һыуыҡҡа сыҙай алмай шул, тамырының тейешле аҙыҡ алыу һәләте кәмей, кипкән ҡабыҡтар аҫтынан өҫкәсә һут күтәрелә алмай. Ҡан тамырҙары ҡороп ҡалған һымаҡ инде...

Әле тәбиғәт серҙәрен бигүк аңлап етмәгән Мөхәмәтйән йыуан тарбаҡ имәнде уратып сыҡты ла атаһына өндәште:

— Ошоно ауҙарайыҡ, атай, үҙе генә лә бер йөк була ла ҡуя.

Урмандағы зәхмәттән күңеле ҡырылып, килке-килке ауыр уйҙар баҫҡан Мөхәмәтшакир улының өндәшеүенә һиҫкәнеп китте. Ҡарашы менән имәнде буйлап алды.

— Ярай, улым, ошоно оҡшатҡанһың икән, һинеңсә булһын, — тип, өҫтөндәге көпөһөн һалып ситкәрәк ырғытты. Үҙе әле генә балҡыған ҡояшты ҡаплап болот ҡабарғанына аптырабыраҡ ҡараны. Яҙғы көн — ярты аҡыл, көҙгө көн — көйһөҙ кейәү икәнен күпте күргән атай кеше белә инде. Был һынамыш ысынбарлыҡҡа тап килеүен әллә нисә тапҡыр кисергәне бар. Шуға ла, ямғыр яуа башлағансы эште төйөнләргә кәрәк, тип уйлап, усына төкөрөп, балтаһын күтәрҙе. Йәтеш кенә баҫып, ҡолас киреп, тирә-яҡҡа шаңдау яңғыратҡансы имән төбөнә үткер балтаһын сапты. Шаҡ-шоҡ бер һелтәнде, ике... Ошо минутта тағы ла көслөрәк шартлау һауаны ярып үтте. Уйламаҫтан, дөбөр-шатыр күк күкрәп, йәшен уты уйнатып, ямғыр ҡоя башланы.

Бер тына һелтәнеүҙән ҡапыл ғына туҡтап, атай кеше арба яғына бармаҡ төрттө.

— Бар, Мөхәмәтйән, өҫтөңә торпошаны ябынып, арба аҫтына инеп боҫ! — тигән әмерен белдерҙе.

— Һин һуң, атай?

— Минең өсөн борсолма, тоҙ булып иремәм. Йығайым инде ошо имәнде.

Атай һүҙе — һүҙ, малай арба ышығына сүгәләне. Ә ямғыр, эре, ауыр тамсыларын бәрә-бәрә, көсәйә генә барҙы. Уның һайын йәшен ҡылысының ялтырауы күҙ асып йомған тиҙлектә ҡабатлана ла ҡабатлана.

Мөхәмәтшакир — сәмле кеше, башлаған эшен ташлай буламы, ҡыҙышып китеп, имән төбөнән һаман таптар осора. Инде ағас гөрһөлдәп ауып китер хәлгә лә етте буғай. Ике яҡтан сапҡан киҫек бер-береһенә тоташа яҙып тора. Иңбаш менән бер этәрһәң, тарбаҡтарын киреп барыр ҙа төшөр һымаҡ. Шулай эшләне лә ир. Артындағы киҫенте төбөнә йәтешләп аяҡ терәп, бар көсөнә этәрә башланы. Ағас, ризаһыҙлыҡ белдергән шикелле ыңғырашып, әкрен генә ҡыйшая, тағы бер көс һалғанда тәгәрәп китергә етешкән. Ләкин имән ҡаршылағы ҡарамаға һөйәлде. Мөхәмәтшакир быныһын көтмәгәйне, ағасты төбөнән бөтөнләй киҫеп сығарһа ла, ергә ҡаҙалды ла ҡалды. Йыуан һуйыл менән күтәреп тә аҙапланды, юҡ, имән яңынан тамыр йәйгән кеүек, шыҡ та итмәй. Инде ҡараманың ботаҡтарын ботарлап төшөрмәй бер ни килеп сыҡмаясағын, көсәнеүҙең бушҡа икәнен аңланы ул. Ә йәшенле ямғыр һаман ҡоя бирә. Болоттар ошо тирәне уратып, бергә ҡушыла ла, шарт та шорт имәнес күкрәү тауышы тарата. Ғәжәп инде, көҙгө күкрәү бит әле, етмәһә, туҡтарға оҡшамаған да...

Атай кеше арба аҫтында торпоша ябынып бөршәйеп ултырған улына күҙ һалды. Әллә еңел кәүҙәле малайҙы ғына мендереп ебәрергәме ағас һөйәлгән ботаҡтарҙы сапҡыларға? Шунда уҡ уйынан кире ҡайтты: ҡуйсы, ул башҡарыр эш түгел, ҡолап имгәнеүе бар. Балтаһын биленә ҡыҫтырып, елләнеп, һөҙәкләнеп һөйәлгән имән буйлап үҙе үрмәләне. Һаҡ ҡына абайлап бармаһа, еүеш ағас олононан аяҡтар тайырға ғына тора. Ләкин ғүмер буйы ағас эшендә теше сыҡҡан таҫыллы ир, ауыр кәүҙәһен етеҙ ҡуҙғатып, имән иң һалған ҡарамаға барып та етте. Бер-ике ботаҡты сабып, осҡараҡ баҫып, аяҡтарын пружиналай һығылдырып, һелкенеп тә ҡараны. Ләкин ағас бәүелеүҙән уҙманы. Әх, ҡәһәрең, аҫтағы имән ботағы ҡараманыҡына сатрашланып ҡыҫылған, шуларҙы ысҡындырмай, аумаясаҡ был. Мөхәмәтшакир, һырғауылға менгәндәге шикелле, аяҡтарын бер-береһенә әләктереп, башы менән аҫҡа әйләнде, балтаһы менән ботаҡтарға һелтәнде. Балта осо менән бер-ике сиртеүе етте, имән, әйләнә биреп, ергә тәгәрәне. Сослоғо етмәне Мөхәмәтшакирҙың, ауыр кәүҙәһен күтәреп ағас өҫтөнә баҫырға өлгөрмәне, имән менән бергә түкмәсләне. Аһ итеп кенә ҡалды ир, күкрәк һөйәктәрен сытырлатып, өҫтөнә ауыр таш өйөлгәндәй... Мөхәмәтшакир аңын юғалтты.

Ағас гөрһөлдәүенә һиҫкәнеп, Мөхәмәтйән тейен тиҙлеге менән арба аҫтынан ырғып сығып, ағас янына килеп тә баҫты. Атаһының күкрәген

ҡыҫып олон ята. Эреле-ваҡлы ботаҡтар, әйтерһең, төрлө ҙурлыҡтағы йылан инде, уның түшенә йылышҡан. Атаһы, меҫкен, күҙен ҙур асҡан да бер нөктәгә текәлгән.

Мөхәмәтйән бер ара урынында ҡатып ҡалды. Унан, ҡапыл иҫенә килеп, йән әсеһенә ҡысҡырып ебәрҙе.

— Атай!..

Атаһы ишетмәне буғай, күҙ ҡабағын да ҡуҙғатманы.

— Атай, һиңә ни булды?! Уф!.. Әйтсе бер һүҙ, атай!..

Мөхәмәтйән ни булғанын төшөнөп, устары менән сикәһен ҡыҫты. Ни эшләргә? Ул атаһы өҫтөндәге ағас олонон нескә беләктәре менән ура-тып күтәрергә аҙапланды. Ҡуҙғатырлыҡ та түгел, яңғыҙы бер ни эшләй алмаясаҡ, ярҙам кәрәк, ярҙам. Аты янына йүгерҙе үҫмер егет, тиҙ генә бороп, ауыл яғына ҡыуаланы малҡайҙы. Урман ауыҙынан сығыу менән ауыл яғына көтөү ыңғайлағанын шәйләне. Шунда тиҙерәк, Хисами ағай янына, ярҙамға уны саҡырырға.

Хисами Мөхәмәтйәндең аңлатыуын ауыҙ асып бер генә тыңланы, шундуҡ осҡан ҡош һымаҡ йылпылдап, менеп тә ултырҙы арбаға. Йәһәт кенә имән ауған ергә килеп тә еттеләр. Ат туҡтар-туҡтамаҫтан үҫмер атаһы янына уҡталды. Ни ишетһен, атаһы өҙөлөп-өҙөлөп ыңғыраша. Ул арала еңел һөйәкле Хисами ҙа килеп баҫҡайны.

— Иҫән бит Шакир ағай.... Йәтешерәк күҫәк әҙерләргә кәрәк... Имәнде күтәреү өсөн.

Мөхәмәтйән бер аҙым самаһы ҡырҙараҡ ятҡан балтаны ботаҡтар аҫтынан шыуышып тартып сығарҙы. Хисами беләк йыуанлыҡ йәш имәнгә бер-ике тапҡыр бар көсөнә сабыуға күҫәклек тәгәрәп тә китте.

Мөхәмәтшакирҙың баш осо тапҡырынан ағасты күтәрергә йәтешлә-неләр. Ағай, аңына килепме, ыңғыраша ла ҡулдары менән күкрәген һыпырмаҡсы итә.

— Атай, беҙ бында, хәҙер, хәҙер...

— Шакир ағай, Шакир ағай.... — Хисами ҙа өндәште.

Ағай ниҙер аңланы, ахырыһы, тын ҡалды.

— Әйҙә, туғаным, бар көскә күтәреп ҡарайыҡ, — тип ҡеүәтләне Хисами, үҙе һаман бер һүҙҙе ҡабатланы: — Ҡотҡарабыҙ ағайҙы, ҡот-ҡарабыҙ!..

Ләкин әйтеүе генә еңел, ағасты бер сама ҡалҡыта төшһәләр ҙә, һөйрәп алырлыҡ түгел. Уның өсөн береһе ҡулын ысҡындырырға тейеш. Тиргә батып, байтаҡ аҙапландылар. Шул саҡ Хисами ергә тубыҡланып, күҫәккә иңбашын терәне, үҙе көсөргәнештән йөҙөн ҡыҙартып, әкрен генә имән аҫтына имгәкләне. Быуылғанға оҡшаған ғырылдыҡ тауыш менән Мөхәмәтйәнгә ни эшләргә кәрәклекте белдерҙе:

— Бар, Мөхәмәт туған, теге яҡтан ботаҡтарҙы сабып таҙарт. Һаҡ ҡына, балта осо атайыңдың тәнен йәрәхәтләй күрмәһен. Етеҙ бул!..

Хисами олон аҫтында иңкәйгән көйө ике ҡулына таянып, елкәһе менән ағасты күтәргән. Бер нисә ботаҡ сабылғас, имән еңеләйә төшкәндәй булды. Мөхәмәтшакир ағай ҙа ҡуҙғалып-ҡуҙғалып ҡуйҙы, эштең ниҙә икәнен төшөндө, буғай.

Хисами тағы өндәште:

— Сыҡ был яҡка, ағасты икәүләп күтәреп, атайың аша ташлайыҡ.

Мөхәмәтйән күҫәкте ҡайыра башлауға, Хисами, елкәһендә ат күтәргән ир уҙаманылай, билен турайта төштө, ике ҡулы менән олонға йәбеште. Унан, көсәнеп, ағайҙың кәүҙәһе аша имәнде күсерә алды.

Хисами еңе менән битен ҡабалан һөртөп, Мөхәмәтшакир ағайҙың башын ҡалҡытты. Ағай күҙен асып, тәүге күргәндәй, иҫ-миҫһеҙ генә ҡараны быларға. Шунда уҡ Хисами һүҙ ҡушты:

— Күтәрелә алаһыңмы, ағай?

Мөхәмәтшакир ағай аңына килде, күрәһең, Хисамиҙың әйткәнен үтәп, ике ҡулын ергә терәне. Әммә кәүҙәһен ҡуҙғата алманы, ыңҡып, кире ятты.

— Атты бында килтер, Мөхәмәт туған, тиҙерәк арбаға һалайыҡ, — тип, Хисами сыбыҡ-сабыҡты арыраҡ ырғытты.

Арбаны Мөхәмәтшакир ағайға буй ҡуйып, йәтеш кенә туҡтаттылар. Хисами бер талай күҙе менән үлсәп сыҡты.

— Былай булмай, арбаны кендегенән һурып төшөрәйек.

Ат та, ниҙер аңлағандай, тыңлап ҡына, ара-тирә бышҡырып, ҡолағын ҡайсылап, имгәнгән хужаһына ҡарап-ҡарап ала. Аңлай торғандыр, нисә йылдар иркәләүен татыған, йылы һүҙен ишеткән малҡай бит. Арба үҙ күсәренә кире ултыртылып, ҡайтыр юлға төшкәс, алаша, һелкетеп ҡуймағайым тигәндәй, йомшаҡ ҡына юрта башланы...

Латиповтар ғаиләһенә килгән был бәлә тураһындағы хәбәр йәшен тиҙлеге менән таралды ауылға. Майкамал апай, иңенә ауыр йөк аҫҡандай, эйелде лә төштө. Көс-хәл менән тын алып ятҡан иренә ҡарай ҙа теләктәр теләй:

— Шакирымдың ғүмеркәйен бирсе, мәрхәмәтле Хоҙайым!..

Ул арала ауылдағы ике улы — Кәшбел менән Ҡәнзел ашығып ҡайтып инде. Ғаилә аҫырап, донъя көтөп ятҡан ҡыҙҙары — Бәҙеғолъямал да, Фәрхиямал да, бәләкәстәрен эйәртеп, ата-әсә өйөнә ашыҡты. Һәр береһе күңеленән доғаларын уҡып алды.

Хоҙайҙан үтенеп мәрхәмәт һорағанғамы, аталары, көс өҫтәлгәндәй, бер нисә һүҙ ҡатты:

— Тыныс булығыҙ, балаҡайҙарым, мин әле донъялыҡтан китергә йыйынмайым, аяҡҡа баҫасаҡмын... Хәлем еңеләйә төштө... Ситтәге улдарыма бер ниндәй ҙә хәбәр бирмәгеҙ, бимазалап... Бирешмәм, ундай ғына хәлдәргә тарыған саҡтар булды ул был ғүмерҙә... Герман һуғышында. Иҫән ҡалдым, Хоҙайға шөкөр... Мәүлиҙә апайға утынды килтерермен, һис шикһеҙ, ҡайғырмаһын...

Бер яҡ мөйөштә мышҡылдап күҙ йәштәрен һөртөп ултырған Мәүлиҙә апайҙы шәйләмәне, буғай, Мөхәмәтшакир.

Мәүлиҙә ауырыуҙың һүҙҙәренән балауыҙҙай йомшарып, Мөхәмәтшакирҙың ҡулын килеп тотто.

— Изгелегеңде һис онотмам, миһырбанлы кеше булдың, — тип һөйләнде.

Майкамал бәләкәй генә төҙәтмә индерҙе ошо урында:

— «Булдың» ғына түгел, әле лә миһырбанлы ул...

Кәпәй-Ҡобау ауылы район үҙәгенә яҡын ятҡанғамы, дауалау пункты юҡ ине. Табип түгел, шәфҡәт туташы ла беркетелмәгән хатта. Сырхап китеүселәр булһа, районға оҙата торғайнылар ул заманда. Әле лә үҙәктән табип саҡырттылар. Аҡ халатлы ир менән йәш ҡатын оҙаҡ көттөрмәй килеп, Мөхәмәтшакир ағайҙы ентекләп тикшерҙе. Тын алышын тыңлап, бармаҡтары менән тәненә баҫҡылап ҡаранылар ҙа, район дауаханаһына һалырға ҡарар иттеләр.

— Ағай ныҡ имгәнгән, бында ғына дауалау мөмкин түгел, — тине күҙлекле ир.

— Хәҙер үк алып китәһегеҙме? — Майкамал өҙгөләнеп иренә йәбеште.

— Хәҙер үк, апай, көтәһе ҡалмаған.

— Мин дә барам... Ҡалмайым.

Табиптар бер-береһенә ҡарашып аңлаштылар.

— Барырһың, апай, ярҙамығыҙ тейер һеҙҙең дә, — тип килеште ир табип.

Ул замандарҙа машина тигәндең өнө лә ишетелмәй ине әле. Табиптар ауылдарға ат менән йөрөй. Мөхәмәтйән алашаны яңынан егергә ашыҡты. Сөнки табиптарҙың тырантасына ауырыуҙы ятҡырыу мөмкин түгел. Бына шулай бер көн эсендә көтөлмәгән ваҡиғалар булып алды.

Шакир ағайҙы айырым палатаға һалдылар. Аҡ халат кейҙереп, Майкамал апайҙы ла ире ҡаршыһына ултырттылар. Табиптар ҡабалан-ҡабалан ниндәйҙер дарыуҙар һөртөп, ауырыуҙың күкрәген марля менән ураны. Бер нисә укол да ҡаҙанылар. Мөхәмәтшакир, үҙен әйләндерептулғандырһалар ҙа, ыһ та итмәне. Түҙемле ир ине ул, ныҡлы ихтыярлы. 14-се йылғы Герман һуғышында яралар алып, йәшәү менән үлем араһындағы сират күперен иҫән-һау үткән кеше бит ул.

Төрлө дауалар биргәндән һуң, табип апайҙы тынысландырҙы.

— Хәҙер ул йоҡлап китәсәк, һеҙ ҙә, апай, бынау эскәмйәгә ятып ял итеп алырһығыҙ. Шәфҡәт туташтары етешмәй, ағайға күҙ-ҡолаҡ булырһығыҙ, килеүегеҙ яҡшы.

Күҙгә ниндәй йоҡо ҡунһын бындай саҡта. Эскәмйәһен ире ятҡан таҡта карауатҡа яҡыныраҡ тартып килтерҙе. Ултыра-ултыра, хәтер йомғағын тағата башланы апай. Бәй, башланғысы алыҫта, томанлы тауҙар аръяғында ағас-ташҡа эләгеп ҡалған һымаҡ тойолһа ла, иҫләй-иҫләй уның да осона сығып була икән дә! Шакиры менән бергә ғүмер итеүҙәренә инде ҡырҡ йылға яҡын ваҡыт үтеп тә киткән. Ошо арауыҡ эсендә ун баланың ата-әсәһе булырға өлгөрҙө улар. Мөхәмәтшакирҙы ауылдың аҡһаҡалы, Майкамалды абруйлы инәй тиңенә ҡуйҙылар. Быныһы йәш иҫәбенән генә түгел, ун бала үҫтергән оло ғаилә башлығы, егәрлелектең өлгөһө булып танылыуҙан да килә ине. Яҡшы атты аҙымынан күрәһең, яҡшы затты эшенән беләһең, тиеүҙәре нәҡ уларға ҡарата әйтелгән һымаҡ. Ә бына егет һәм ҡыҙ саҡтарын юллағанда, бер тотам дилбегә хәтлем генә шикелле. Бер нисә ваҡ-ваҡ ҡына урамлы ошо ауылда үҫһәләр ҙә, егеттәрҙең, ҡыҙҙарҙың осрашыуҙары бик һирәк күренеш булыр ине. Хәҙергеләй йыйылышып уйын ҡороуҙар юҡ ине ул заман-

дарҙа. Хәйер, ҡыҙҙар бер-береһенә ултырмаға йөрөһә лә, тәҙрә тирәһендә уралған егет-елкенсәкте тупһа аша ла атлатманылар. Ундай хәлдәр яҙыҡлыҡҡа һаналды, яҙылмаған ҡанун рәүешендә тыйыла килде. Халыҡтың был тыйнаҡ ғәҙәтен боҙорға берәүҙең дә намыҫы етмәне. Әгәр ҙә, яҙмышың яҙып, осраҡлы ғына осрашып ҡуймаһаң...

## Һыу буйҙары тал-тирәк

Мөхәмәтшакир менән Майкамалдың осрашыуы ла көтмәгәндә килеп сыҡты. Ҡыҙ кискә ҡарай тал-тирәктәр араһынан көмөш таҫмалай ялтырап аҡҡан Ҡыйҙаш йылғаһына һыу алырға төшкәйне.

Баҫманың иң осона аяҡ терәп, силәктәрен мөлдөрәмә тултырып, һыу ҙа алып ҡуйҙы. Йылғаның гүзәллегенән тиҙ генә айырылғыһы килмәне Майкамалдың. Бынау саҡлы һиллекте, был тиклем дә сафлыҡты нисек тиҙ генә ташлап китәһең инде. Ваҡ шаҙра тулҡынлы йылға, әйтерһең, унын күңелендәге тынмаҫ хистәр ағышы. Ҡыҙҙың буй еткереп иләҫ-миләҫ килгән ваҡыты, күңеле кемделер көткәндәй. Кемде юҡһыналыр, уныһын нисек белһен ул. Ҡыйҙашҡа һәр яҙ һайын ҡыйғаҡлашып ҡайтып төшкән ҡыр ҡаҙҙарын һағына төҫлө. Ҡаҙҙар ҡайтып, сыңғырҙашҡан тауыштары бар ауылға һағышлы моң тарата. Майҙай йомшаҡ, ебәк нурлы ошо яҙғы кистә йыл да ул ашҡынып ҡаршы алған ҡыр ҡаҙҙары ҡанат йәйеп бына-бына килеп төшөр шикелле. Улар ҡайтыр ҙа күкрәктән урғылған хисиәт әҫәрлегенә тағы урар әле, күңеле, ҡош моңдарын һибә-һибә, һайрарға тотонор!..

Бер килке шулай хыял донъяһын байҡағандан һуң, Майкамал, ниндәйҙер дәртле көс тойоп, устары менән ағын һыуҙы сәсрәтә башланы. Унан, ҡапыл туҡтап, итәген тубығынан өҫкәрәк күтәрҙе лә, йылғаның һай төшөнән бер былай, бер тегеләй йүгергеләп үтте. Һалҡынса һыу хас та шифалы һут инде, өҫкә — күкрәгенә саҡлы ләззәт кинәнестәрен таратты. Ошолай онотолоп, ләззәтләнеп күпме йөрөгәндер ҡыҙ, ат бышҡырыуына тертләп, ҡойолоп төштө. Яр буйында ат етәкләгән егет баҫып тора ине.

— Кит, Хоҙайһыҙ бәндә, әпәлә, нимә ҡарап тораһың, оятһыҙ?! — тип сырылданы Майкамал тиҙ генә итәген төшөрөп.

Бит остары ут янған егет тә уңайһыҙланды.

— Мин абайламаным, ғәфү ит, һылыу.

— Абайламаным, имеш, әрешке кеүек һырылырға ғына тораһығыҙ инде һеҙ.

— Ысынлап әйтәм, бына антым! — Егет устарын түшенә терәп баш эйҙе.

Ҡыҙ силәктәрен алырға баҫма өҫтөнән йүгерҙе. Ярҙамлашырға, егет тә силәккә йәбеште. Икеһе бер юлы ҡул һуҙғас, егет, йылмая биреп, ҡыҙға ҡараш ташланы. Ҡыҙҙың күҙҙәре ут янып, ялҡын бәреп торғандай. Ҡара ҡыйғас ҡашы аҡһыл йөҙөнә килешле матурлыҡ өҫтәй.

Ҡыҙ ҙа күҙ һирпте егеткә. Әле генә бүртенгән ярһыу асыуы һыпырылды ла төштө. Егет бик ягымлы, яҡын булып күренде уға.

— Бер әйбергә ике ҡул бергә үрелһә, теләктәр берегә, тигәндәр. — Егет ихлас көлөп ҡуйҙы. — Мин һине беләм бит, һылыу, Ғабдрахман ағайҙың ҡыҙы лаһа!

— Мин дә беләм, Мөхәмәтлатип улы Мөхәмәтшакир, — тине ҡыҙ көләмһөрәй төшөп.

Майкамал етеҙ хәрәкәт менән көйәнтәһенең остарына силәктәрен эләктереп, ярлауыҡ өҫтөндәге сиҙәмлеккә күтәрелде, һағайып, тирә-яҡҡа күҙ һалды: егет кеше менән һөйләшеп тороуы сит-ят күҙҙәргә салынмағайы, юғиһә килешһеҙ ҡылыҡҡа һанала ир-ат менән гәп һатыуҙар.

Мөхәмәтшакир ҙа, ҡапыл ниндәйҙер билдәһеҙ ярһыулыҡ һиҙеп, бер-ике һикереүҙә яр өҫтөнә менеп баҫты. Ҡыҙ силәктәрен сайпылдырмай еңел атлап, һуҡмаҡ буйлап китә лә башлағайны. Тағы ла бер һүҙ ҡатмаҡсы егет, ауыҙын асып, урынында тыпырсыныуынан уҙманы. Шулай ҙа баҙнат ҡылды:

— Иртәгә лә һыу ала төш, һылыуҡай!..

Ҡыҙ, икеләп үрелгән оҙон толомдарын сайҡалдырып, йөҙ борҙо ла ары ашыҡты.

Икенсе көндө лә, кисәге ваҡытты самалап, ат һыулатырға төштө Шакир. Әй йөрөнө егет таллыҡ тирәһендә, ары һуғылды, бире һуғылды, һыу ала килгән башҡа ҡатын-ҡыҙға салынмаҫҡа тырышып, таныш йөҙҙө күрергә зарыҡты. Аты ла һутлы үлән утлап туйҙы, күрәһең, баш һелкеп, бер урында хужаһын көттө. Ҡыҙҙың килеренән өмөт өҙөп, егет атының йүгәненә йәбеште. Өс көн ошо юлды тапаны егет. Дүртенсе көндә генә, болоттарҙы йыртып килеп сыҡҡан ҡояш кеүек, өҙөлөп көткән гүзәл балҡыш пәйҙә булды. Мөхәмәтшакир, ҡыҙҙың йөҙөн күреп, хатта бер ни тиклем ҡаушай ҙа төштө. Аяҡтары, әйтерһең, баҫҡан ерендә тамырланған, аҙым да яһай алмай, һынын ҡатырҙы. Майкамал иһә, битараф ҡына күҙ ҡырыйын сирттереп, үтте лә китте эргәһенән. Егет иҫ йыйғансы силәктәрен тултырып, яр өҫтөнә күтәрелә лә башланы. Шунда ғына Мөхәмәтшакирға йән өрөлдө: ҡыҙҙың эйелә-һығыла ваҡ баҫҡыстарҙы буйлаған мәлендә, ярҙам иткәндә ярҙан этмәйҙәр, тигәндәй, рөхсәтһеҙ-ниһеҙ, йәһәт кенә, теге ваҡыттағыса силәк ҡапҡасына йәбеште.

— Ҡуй, үҙемдең дә көсөм етә, — тигән булды ҡыҙ, йөҙөн ҡыҙарта биреп, үҙе егет тотҡан силәкте ҡулынан ысҡындырҙы. Шунда уҡ өҫтәп тә ҡуйҙы: — Һыу ташыу ир-егет эше түгел дә ул.

— Булышыу — яҙыҡлыҡҡа яҙылмаған, мин былай ғына.

Мөхәмәтшакир ҙур һиммәтлек күрһәтеп, ҡиммәтле-зиннәтле әйбер шикелле, силәкте һаҡ ҡына өҫкә алып менде. Эйе, был силәк уның өсөн затлыларҙан-затлыһы ине, тамсыһы ла ергә сайпылмаһын; ул хас та мөхәббәт тулы күңел күле, һис кенә лә кәмергә, ситкә сарпылырға тейеш түгел. Һәр хәлдә, егет өсөн ошолай күренде саф һыу менән күҙҙәй тулы был силәк.

— Рәхмәт ярҙамыңа, Мөхәмәтшакир әфәнде, — тине Майкамал итәғәтле итеп, оялсан ғына.

— Үҙеңә рәхмәт, — Мөхәмәтшакир бер аҙ тотлоға бирҙе, — килеүеңә, көтә-көтә ике күҙем дүрт булһа ла.

— Килмәй, ҡайҙа бараһың, эсер һыуыбыҙ ошонда булғас. — Эскерһеҙ яуапланы ҡыҙ.

— Бер һөйләшәһе ине...

— Һөйләшәбеҙ бит инде, нисек һөйләшәләр тағы? — тине лә, Майкамал серле генә ҡараш ташлап, китеп тә барҙы.

Бына һиңә ҡыҙ яуабы: аңлаһаң — аңла, аңламаһаң — юҡ. Ошо яуабы ла егеттең йөрәгендә өмөт сатҡылары уйнатҡандай итте...

Майкамал Мөхәмәтшакирҙың ыңғырашыуына һиҫкәнеп китте. Уйҙары — утлы йомғаҡ — әллә ҡайҙарға, икһеҙ-сикһеҙ йыһандың төрлө тарафтарына осто.

— Һыҙланаһыңмы, ҡартыҡайым, шәфҡәт туташын саҡырайыммы? — тип, уның йөҙөнә эйелде.

— Саҡырыу менән ул нишләтә ала инде. Күкрәгем ҡыҫа, иркенлек талап итә ҡоршауҙағы кейек шикелле. — Көс-хәл менән ыңғырашып яуапланы ҡарты.

— Күкрәк һөйәгең сатнаған, тине табип... Эй Хоҙайым, ниңә генә киттең икән урманға. — Уфтанды Майкамал. — Ниңә генә тыйып ҡалманым шунда.

— Мәүлиҙәгә утын кәрәк ине ләһә... Мин тиҙ генә сыға алмам әле бынан. Ҡайтҡас, Мөхәмәтйәнгә әйт, килтереп бирһен шул етем еңгәйгә еңелерәк ҡоро-һары булһа ла. Нәҙерҙе ҡайтарһын, сауабы тейер үҙенә.

Кеше өсөн сөңгөлгә сумырға әҙер инде Шакиры, ғүмерле булғыры. Фәрештәләрҙең амин тигән сағына тура килһә ярар ине теләктәре. Майкамал эстән генә теләктәр теләп, доғалар уҡыны.

Мөхәмәтшакир ҙа бер аҙ тынысланды. Ир кеше, әлбиттә, түҙемле, һыҙланһа ла, сырай һытырға тырышмай. Ниндәй генә ауыр хәлдәр кисермәне, әммә балаларына тамсы ла белдермәне. Ихтыяр көсө быныһын да еңеп сығыр әле, Алла бойорһа!..

Дежурҙағы шәфҡәт туташы, ара-тирә инеп, ауырыуҙың хәлен тикшереп тора. Әле лә Мөхәмәтшакирға укол ҡаҙағас, палатаны тағы һиллек баҫты. Ир күрек өрҙөрткән шикелле мыш-мыш тын алып, уяулыйоҡоло хәлгә тарыны.

Майкамалды йоҡо алырлыҡ түгел, иренә бағып, йәшлектең йәшел сиҙәменә кире ҡайтты.

...Осраша-күрешә йөрөүҙәренә байтаҡ ғүмер үтеп китте. Һалҡын ҡыш та килеп етте.

Шакир ат һуғарып бер барып ҡайтты Ҡыйҙашҡа. Оҙаҡ ҡына көтөп йөрөһә лә, Майкамал төшмәне һыу алырға. Һыуға килеүсе башҡа ҡатынҡыҙ иғтибар итмәй ҡалманы егеткә.

— Әллә атыңды тал сыбығы көйшәтергә килтерҙеңме, Шакир? Атҡа сыбыҡ түгел, һоло кәрәк ул, —тип көлдө бер еңгәй.

Икенсеһе, йәшерәге, уға тиңдәшерәк ҡыҙ, һамаҡлап өҫтәне:

— Һыуҙар эсмәй атҡайың, ниҙәр уйлай башҡайың?..

Ошонан һуң ғына яман күҙҙәрҙән ҡотолорға кәрәклеген иҫенә төшөрөп, өй яғына ыңғайланы егет. Ҡайтҡас та ихатала оҙаҡ йөрөнө,

ике күҙе ут янып, тик һыу буйын күҙәтә. Һыу юлын күрер өсөн бесән өйөлгән лапаҫҡа менергә кәрәк. Һәнәк тотҡан була ла, шунда үрмәләй, малдарға бесән һала, йәнәһе. Бер үрмәләп, бер төшөп, һәттәй маташҡандан һуң, көйәнтә күтәргән таныш һын күренде. Лапаҫтан осоп уҡ төштө Шакир. Тиҙ генә силәктәр тотоп, Ҡыйҙашҡа ашыкты. Майкамал мәкенән эйелеп һыу алған саҡта ғына эргәһенә килеп баҫты:

— Уф, ҡотомдо алдың, абайламай ҡалғанмын! — тип ҡыҙ һынын турайтты.

— Иртәнән бирле һине көтәм, әй, килмәйһең дә килмәйһең.

— Нимә булды ул саҡлы, ут сыҡҡандай.

— Булды... Барыһы ла ыңғайға бара...

— Сапҡан аттай ярһығанһың, Шакир, бер аҙ тын алып, яйлап ҡына һөйлә, — тине Майкамал, шаяртып.

— Ярһырһың да... Бөгөн кис атайым менән әсәйем һеҙгә бара.

— Ҡунаҡҡамы?

— Ҡунаҡлапмы, муйнаҡлапмы, уныһын әйтә алмайым. Һине яусылап.

— Мине?..

— Эйе, кемде булһын тағы?

— Аһ-аһ, бына һиңә иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ...

— Шулай ҡарар иттеләр, ҡыҫып алып баралар мине.

Ысынлап та, ҡыш урталарында Алтынбикә апай мыжыҡлана башланы. Иртәнге сәйгә ултырыу менән бер нәмә тылҡый:

— Һыйыр һауырға ла ярҙамсым юҡ, ҡулдарым һыҙлай. Мал-тыуар ҡарарға ла, бынау яландай өйҙө йыйыштырырға ла, аш-һыу әҙерләргә лә бер үҙем. Түрҙә генә ултырыр көн еткән бит инде беҙгә, атаһы.

Мөхәмәтлатип үҙенең сырхаулап торғанын йышыраҡ ҡабатлай.

— Ҡартайтылды, бөтәһенә лә өлгөрөп булмай хәҙер. Өйгә йәм биреүсе йәш ҡатын-ҡыҙ кәрәк тә бит...

Был һөйләшеүҙең бөтә асылы — Шакирға ым яһау. Уныһын инде яҡшы аңлай улдары. Өйгә йәм индереү уның сиратында хәҙер. Тик үҙе башлап өндәшмәй әле, ҡыя алмай.

Бер көндө, алдан һөйләшеп ҡуйыуҙары билдәле, туп-тура ярып һалды ата-әсәһе.

— Аҡыллыға ишара ла етә, тиҙәр, беҙҙең зарҙы аңлайһыңмы һин, Мөхәмәтшакир? — тип Мөхәмәтлатип ҡарт һорау ташланы.

Шакир һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә йылмайыу һыҙаты сығарҙы. Бына-бына мәсьәлә асыҡланырға яҡынлаша, тигән уй үтте. Хәйләләшеп, юрамал белмәмешкә һалышты.

— Әлләсе... аңлатмағас ни үҙегеҙ.

Ҡыҙҙы китте атаһы:

— Ғүмер буйы яңғыҙ ата ҡаҙ кеүек йөрөргә уйлайһыңмы ни? Беҙҙе әллә һиҙмәй тиһеңме? Берегеҙ теге яҡта ҡаңғылдай, икенсегеҙ был яҡта ҡыйғаҡлай, Ҡыйҙашҡа төшкән ҡыр ҡаҙҙары кеүек. Күпме ат һуғарып йөрөргә итәһең тағы?..

Алтынбикә ҡабырғаһына төрттө ҡартының:

— Ҡыҙмай ғына һөйләш, атаһы. Изге эште ярһып башларға ярамай. Өйгә тыныслыҡ килһен тиң... Беҙгә килен кәрәк, Мөхәмәтшакир, килен кәрәк. Шул мәсьәләне уртаға һалғанбыҙ.

— Килен төҫө күрәйек тип хыялланабыҙ, улым. — Мөхәмәтлатип шөйлә баҫалҡы тауышҡа күсте.

— Уныһы һеҙҙең фатихала инде, — тине Шакир, уңайһыҙланғандай.

— Иртәгә үк яусылап барабыҙ, улайһа. Кемгә икәнен дә әйтеп тораһы түгел, үҙең беләһең. — Мөхәмәтлатип өҙә тотто.

— Иртәгә үк ме ни? — тип аптырашта ҡалды Шакир.

— Ниңә, ҡасан тағы, һаҡал үҫкәнен көтөргәме? Йәшең еткән, буйһының бар, көс-ҡеүәт ингән, тәүәккәлләйек тә ҡуяйыҡ.

— Яҙғараҡ ярамаҫмы ни?

— Туй ул ҡыш яҡшы ауыл кешеһенә. Ҡыш — туйымлы, яҙ өҙөклөк саҡ, — тип аңлатты әсәһе.

— Ҡышын төн оҙон, көн ҡыҫҡа. Көнө — беҙҙең өсөн, төнө — үҙегеҙгә. Һә-һә-һә! — тип көлдө Мөхәмәтлатип. — Булды, улым, килештек.

Мөхәмәтшакир ата-әсәһе һөйләшеүен өҙә-йолҡа ғына аңлатып бирҙе Майкамалға.

Ҡыҙ бер талай уйға батты. Өҙә әйтелгән хәбәрҙән шаңҡып ҡалды. Баш сайҡаны.

— Ю-уҡ!..

— Ниңә, вәғәҙәне елгә бирҙекме ни беҙ?

— Ю-уҡ!.. Беҙ яҙ тигәйнек бит.

— Яҙҙы көтмәйҙәр шул, ҡыш шәп була, тиҙәр.

— Ю-уҡ... Кис килмәһендәр... Беҙҙең тормош кис түгел, иртән башланырға тейеш, яңы көн тыуғандай.

— Иртән?.. Бәй, кеше йоҡонан тороп, арлы-бирле итергә лә өлгөрмәһенме?..

— Ярай, иртән үк тимәһәм дә, төш тирәһендә, тормошобоҙ яҡты көн кеүек булһын!..

— Быныһы дөрөҫ. Кискә ҡарағанда көн хәйерлерәк... Нисек туҡтатырға һуң уларҙы?

— Баш үҙеңдә, әмәлен табырһың әле.

— Уф, нисек, нисек?

— Иҙел кисеп, — тине лә ҡыҙ ҡуҙғалды, һерәйеп бында оҙаҡларға ярамағанын белә ул. Күҙ күрә, һүҙ етә, көн элгәре хәбәр таралмаһын әле.

Хәсрәткә батып, егет һыу ҙа алмай ҡайтып инде. Атай-әсәй әҙерлек башлаған да инде. Әсәһе бауырһаҡ бешерергә тотонған тәмле еҫ аңҡытып. Атаһы соландан ҡаҙ түшкәһе һайлап индерҙе.

— Бынау ата ҡаҙҙың түшкәһе иң эреһе, шул ярармы, Алтынбикә, күстәнәскә?

— Кит, туй күрмәгән шикелле ҡыланаһың, беҙ бит ҡыҙ һорарға барабыҙ, инә ҡаҙ кәрәк.

— Туйҙа ғына ул инә ҡаҙ бешерәләр, татлыраҡ була тип. Был туй түгел бит әле.

— Туйға уҡ етмәһә лә, туйҙың башы. Башы нисек, артабанғыһы ла шулай инде уның.

— Ә-ә, аңлашылды. Инәһен әҙерләрмен улайһа.

Ҡыҙыҡ итеп тыңлай ҙа ул Шакир атай-әсәй ләкәбен, кискә барыуҙарынан нисек тыйып ҡалырға һуң быларҙы?

Ҡышҡы көн — бер дилбегә, тағалып бөтөп тә килә. Ярай әле былар, еңелсә генә йыуынып алайыҡ тип, иртән яғылған мунсаға йыйындылар. Улар юҡ арала Шакирҙың башына бер хәйлә килде: быларҙың ҡунаҡҡа кейер кейемдәрен йәшереп ҡуйырға...

Күп һайланып тормай, атаһының сапанын, таҡыяһын, әсәһенең мамыҡ шәлен әләктереп, өй башындағы йәшниккә тыҡты.

Былар ҡайтып, уф та пуф сәй эсеп, тегендә барғас та ашарға урын ҡалһын тип, әҙерләнә башланы. Бына әйберҙәрҙе аҡтаралар: ҡайҙа сапан, ҡайҙа шәл? Мөхәмәтшакир танауын төшөргән булып, маңлай аҫтынан күҙәтә. Ыуарама килә атай менән әсәй.

— Берәй ерҙә ҡалдырҙыҡ микән әллә? Баш әйләнеп, өй туйлаған саҡта онотолғанмы, әсәһе.

— Юҡсы. Унан һуң Фазылдарға барҙыҡ бит әле.

— Һин күрмәнеңме, Мөхәмәтшакир?

— Күрмәнем.

— Өйҙән аякланып сығып китмәгәндер бит?

— Аһ-аһ, ни хәсиәт был? — тип аптыраны әсәһе бот сабып. — Нишләйбеҙ хәҙер?

— Аптырама, берәй йүнен табып, барғас барабыҙ инде. Тимерҙе ҡыҙыуында һуғырға кәрәк!

— Эш кейеме менәнме ни, ҡоҙа-ҡоҙағый буласаҡ кешеләрҙең иҫе китер.

— Бар, Шакир улым, ағайыңдарға сап. Уның сапаны нәҡ миңә ярарлыҡ ҡына, еңгәңдең шәлен алып кил, — тине атаһы, фекер туплап. — Йәһәт бул!

Шакир шул минутта уҡ тышҡа атлыҡты. Ағаһы менән еңгәһенә ни бар, шуны һөйләне.

— Дөрөҫ әйтә бит Майкамал, ушлы апһын булмаҡсы, кис килен яусылаймы кеше?

— Улайһа, һеҙ атай менән әсәйгә ипләп кенә аңлатып ҡайтығыҙ әле. Мин әйткәнде ҡолаҡтарына ла элмәҫтәр улар.

— Шулай итәйек, — тип хәл итте ағаһы.

Ағаһы менән еңгәһе төшөндөрөп, оҙаҡ бәхәсләшкәндән һуң, аталары күнгәндәй итте.

— Шулайҙыр ҙа... Мин ни, әсәйегеҙҙе кис барып алдым да ҡайттым. Алтынбикә лә кеткелдәп көлдө.

— Минең кеүек етем, аҫырау ҡыҙға шулай ҙа ярағандыр инде... Ғабдрахмандар — хәлле ғаилә. Бөгөнгә киленде ебәрәйек димсе итеп, иртәгә төш килеүебеҙҙе кәүҙәләндереп ҡайтһын.

— Быныһы — аҡыл, — тип килеште Мөхәмәтлатип.

Икенсе көндө көн үҙәгендә, ҡапҡаһын киң асып, ҡолас йәйеп ҡаршылаңы Ғабдрахман.

— Әйҙүк, әйҙүк, ҡорҙаш, рәхим итегеҙ!

— Әйҙүкләп киләбеҙ инде, рөхсәт булһа.

— Рөхсәте бар, ҡорҙаш. Үҙебеҙ ҙә саҡырып алырға йыйынып йөрөй инек әле, — тип, түргә әйҙәне хужа менән хужабикә.

— Бисмиллаһи рахман рәхим! Өйөгөҙ йылы, түрегеҙ йомшаҡ, доға ҡылып алайыҡ иң тәүҙә.

Доғанан һуң ашъяулыҡ йәйелде. Иркенләп һөйләшеү ялғанды.

— Иҫәнлектә-һаулыҡтамы, донъяларығыҙ именме?

— Аллаға шөкөр, барыһы ла үҙ яйында.

— Бирен Хоҙай! Һм... һм... — Тамаҡ ҡырып алды Мөхәмәтлатип. — Киленебеҙ һеҙҙең хәбәрҙе түкмәй-сәсмәй килтереп еткерҙе, иманлы көнгә тура килһен инде.

— Тәҡдимегеҙҙе күндәм ҡабул иттек, ҡорҙаш, алдағыһын һөйләшәйек хәҙер.

— Һөйләшергә килдек инде, килешергә. Һеҙ кейәүле, беҙ киленле булырға өмөт бағлайбыҙ.

— Бер-беребеҙҙе аяҡ баҫҡандан бирле беләбеҙ. Дан ғаилә менән туғанлашыу шан килтерер, тигәндәр, улығыҙ — алтын, ҡыҙыбыҙ — көмөш. Үҙҙәре лә килешкән буғай инде... Һиңә яуап, ҡорҙаш.

— Ҡоҙа тиһәң дә яҙа булмаҫ, — тип һүҙгә ҡыҫылды Алтынбикә.

— Уныһын һөйләшеп килешкәс тә әйтергә өлгөрөрбөҙ, — тине Ғабдрахман, ниндәйҙер дәғүәләр барлығын белдереп.

— Килешәйек. Йолаһын йола итәйек, иншалла!

— Йолаһын йола итәйек шул. Беҙҙең ырыуҙың йолаһы икебеҙгә лә берҙәй: мең ырыуы башҡорттары бит беҙ. — Ғабдрахман уратып, тәфсирләп аңлатырға тотондо был урында. — Боронораҡ ауылыбыҙға мишәрҙәрҙе, сирмештәрҙе һыйындырып, ғөрөф-ғәҙәт бер аҙ буталана төшһә лә, ата-бабай рухына таянайыҡ.

— Бик мәслихәт, мин дә шулай тим шул. — Тел төбөн аңланы буласаҡ ҡоҙаһының Мөхәмәтлатип.

— Ҡалым, бирнә биреү йолаһы ла борондан килә, тиеүем, ҡоҙа.

— Уныһын да үлсәп киҫәйек.

— Ҡалым ҡалыныраҡ, бирнә биргәнсә була инде ул. Һеҙ ни әйтерһегеҙ? — тине хәйләкәр Ғабдрахман.

— Һеҙҙекен алдан уҡ хуплайбыҙ. Беҙ үҙебеҙсә туплайбыҙ: һиңә, ҡоҙа, бүре толобо, ҡоҙағыйға — кәзәкей!

— Оһ-о! — тип һикереп торҙо Ғабдрахман, — һин уларҙы ҡайҙан алырһың һуң?

— Бар алыр урыны. Бүздәктәге төмән сауҙагәрен беләһеңдер бит, шул дүнәжен байталыма күҙ ата, ни теләһәң, шуны бирәм, ти. Мин ни, алдан һиҙенеп торам, һи-һи, туй яҡынлашыуын, һораным һин әйткәндәрҙе.

— Ай, ул дүнәжен тирә-йүнгә берәү генә. Дүндер кире, бирмә төмәнгә, шуны миңә бүләк итһәң, башҡа бер ни ҙә кәрәкмәй, ҡоҙа, ҡорҙашым... Минең бейәне күрәһеңдер, ҡартайҙы, ҡолон килтермәй башланы.

— Бынынһы ла ҙур аҡыл. Дүнәжен — һинеке!

Үрелеп арҡаһынан һөйҙө Мөхәмәтлатипты өй хужаһы.

— Яҡшыны туған итеү — тулы бәхеткә тиң ул!.. Ике яҡтан да бер аҙналыҡ туй. Ҡашҡа атым йәлме ни алмашы булғас, салырмын шуны. Үәт!

— Ҡуй, ҡоҙа, һарығы, ҡаҙы ла ярар.

Ҡарт ит кимертеп, туйҙың йәмен ебәрмәһен, тиеүе ине Мөхәмәтлатиптың.

— Туйҙы ҡасанға билдәләйбеҙ, әләйгәс.

— Әҙерлеккә ун көн дә етер инде ул.

— Етер, етер, әлбиттә. Аҙаҡ үпкәләшмәҫ өсөн, шуныһы ла мәғлүм булһын: ҡыҙыбыҙҙы яҙға ғына, май айына төшкәс кенә алып ҡайтырһығыҙ.

— Бәй, шулай була микән, йәштәр һуң нишләр, ҡош нәҫеленән түгел бит улар яҙҙы көтөргә.

— У-у, килен алғас дүрт-биш ай көтөргә, — тип хайран ҡалды Алтынбикә.

— Атаһы, уйлап һөйләш әле, —тине иҫкәртеп Зәйнәп.

— И-и, ҡабаланмағыҙ, йолабыҙ шулай ҙаһа, йоланан яҙлыҡмайыҡ, мин әйтәм. Кейәү килеп йөрөр, ситкә типмәбеҙ.

Бәхәслерәк килеп сыҡһа ла, ҡул бирештеләр.

Туй һоҡланырлыҡ үтте. Туған-тумаса ғына түгел, ауылдың ярты халҡы һыйланды. Был туй ғаләмдең егерменсе быуатҡа баҫҡан йылында булды.

## Киске шәфәҡ

Мөхәмәтшакир таң һыҙылған мәлдә яңынан тынғыһыҙланды.

— Мин бында, ҡартыҡайым, ниндәй ярҙам кәрәк? — тип бит-сәсен һыйпаны Майкамал.

— Һин һаман ҡайтманыңмы ни? Малайҙарға күҙ-ҡолаҡ кәрәк бит, тим.

— Малайҙарың күптән бәлиғ инде. Иң кесеһе ун биш йәштә. Үҙеңде өҙгөләмә, ҡартым, — тип йыуатты ҡарсығы.

— Бала бала инде. Олоһо ни, кесеһе ни, ун бармағыма — унау. Ҡайһыһын тешләһәң дә ауырта, — ҡыҫын тын ала-ала һөйләнеүен белде ҡартыҡайы. — Бына ейән-ейәнсәрҙәрем... Туҡта, иҫәбенән сыҡтым, нисәү әле улары?

— Күп түгел, утыҙға тулып килә. Ике ҡыҙыбыҙҙа ғына алтау, иң оло улыбыҙ Мөхәмәтшала — һигеҙ, Закирҙа, Ғилемдә — өсәр, — тип теҙҙе Майкамал.

— Беләм, беләм, иҫкә төштө барыһы ла, Ғәйнелдә, Кәшбелдә, Сафала ейән-ейәнсәрҙәрем үҫә. Икәүһе өйләнмәгән әле.

Иренең дөрөҫ һанай алыуына Майкамал ҡыуанды ғына, тимәк, аңы теүәлләнә, шәбәйеү яғына бара түгелме?

— Беҙ балаларыбыҙҙың бөтәһенә лә, үҙебеҙҙеке шикелле, ҡуш исемдәр ҡуштыҡ, ғүмерҙәре оҙон булһын, тип теләп. Оҙаҡ йәшәһендәр инде, балаҡайҙарым, тағы ла артһын силсилә[1]...

— Йә раббым, донъялар йүнгә килә бара, именлек теләйһе генә ҡала, — тип йөпләне ирен Майкамал.

— Именлек кәрәк шул. 1914 йылда ярман һуғышы ла йәнгә тейеп бөттө. Шунда алған яралар һаман һыҙлаштырып ҡуя әле лә...

Әйтеп тә бөттө, ҡаты ыңғыраша ла башланы Мөхәмәтшакир.

Майкамал шәфҡәт туташы артынан йүгерҙе. Йәш ҡатын тағы ниндәйҙер уколдар ҡаҙаны. Ауырыу йәнә йоҡоға талды.

— Күп һөйләшергә тырышмағыҙ, апай, уянһа ла, хәле тиҙ алына уның, ныҡ имгәнгән, — тигән кәңәштәр бирҙе туташ.

Нишләһен инде Майкамал, яңғыҙға уй юлдаш, уйлана ла уфтана.

...Туйҙан һуң атаһы, барыбер, яҙғаса өйҙән ебәрмәне. Урамдар йәшәреп, болон-туғайҙар сәскәгә күмелгәс, Ҡыйҙашҡа ҡыр ҡаҙҙары ҡайтҡан мәлдә генә килеп алырға ҡушты кейәүенә. Ул көндө оло мәжлес — һөйһөн туйы булып алды. Ғабдрахман әйтмешләй, йолаһы шулай уның.

Икенсе яҡтан килен төшөрөү ҙур байрамға әүерелде. Мөхәмәтшакирҙың ағаһы быҙау етәкләп килгән. Үҙе бер яҡтан, бисәһе икенсе яҡтан киленде тырантастан етәкләп төшөрә биргәс, еңгәй көлә-көлә ҡысҡырып ебәрҙе.

— Быҙауға таян, апһын, быҙауға таян, бай булырһығыҙ!

Быҙауға таянып төшөү менән Шакир күтәреп алып, кәләшен тупһа алдына һалынған мендәргә баҫтырҙы.

— Төклө аяғың менән, килен, ауыҙыңа бал да май. Телең майҙай йомшаҡ, балдай татлы булһын! — Алтынбикә ике сеүәтәнән алмашлап, ағас ҡалаҡ тултырып киленгә ҡаптыра.

Артабан инде уйын-көлкө, йыр-моң күмелешендә башҡа йолалар башҡарылды. Бына шундай замандар бар ине Майкамал килен булып төшкәндә.

Кейәү йортона килгәндә килен буйға ла ҡалғайны инде. Тәүге малайҙары тыуҙы. Уға Мөхәмәтша тип исем ҡуштылар. Килен үрсемле заттан икән. Йыл ашалап ике ҡыҙ бала — Бәҙеғолъямал, Фәрхиямал донъяға килде. Өс йылдан һуң Мөхәмәтзакир, бер йыл ғына ара менән Ғәйнелғилем, Мөхәмәтсафа тыуҙы. Беренсе бөтә донъя һуғышы алдынан ғына тағы бер малай табып бирҙе Майкамал. Уныһын Фәтҡелғилем тип нарыҡланылар.

Донъяға ҡот ҡунып, балалар үҫтереп йәшәп ятҡанда илдең тыныслығы боҙолдо: ярман беҙгә ҡаршы һуғыш башлаған, тигән оран таралды ауылға.

— Ирҙәребеҙҙе һуғышҡа алып китәләр икән. — Ҡатын-ҡыҙ, үкһеп, сыр-сыу килде.

---

[1] Силсилә — нәҫел сылбыры

— Ебәрмәйем. Ярманы менән урыҫ үҙе һуғышһын, — тиеүселәр ҙә табылды.

Уларға ҡарата старшина йәмерәйеп бармаҡ янаны.

— Телеңде ҡыҫҡартып ҡуймағайҙары. Беҙ бит урыҫ ҡулы аҫтында йәшәйбеҙ.

Күпме һүҙ ҡуйыртмаһындар, ай-вайға ҡуймай, ирҙәрҙе хеҙмәткә йыйҙылар. Ете бала атаһы, йәше ҡырҡҡа тартылған Мөхәмәтшакирҙы ла алдылар.

— Нишләрмен инде итәк тулы бала менән, атайҙар ҙа гүр эйәһе хәҙер, ҡәйнәм һыу эскеһеҙ булып ауырып ята, — тип үрһәләнде Майкамал.

— И-и, бисәкәй, бәлә ағас башынан түгел, кеше башынан йөрөй... Түҙ, йәнем, оло улым, ҡыҙым ҡул араһына инде. Беҙ ни, ана күпме ир китә ауылыбыҙҙан ғына, ҡыйратырбыҙ ҙа ҡайтырбыҙ шул баҫҡынсыларҙы. — Шакир күкрәк һуғып елләнде.

— Иҫән-һау ҡайтығыҙ инде. Улар бит билгә таҫтамал ташлап көрәшергә килмәгән, мылтыҡтан аталар.

— Беҙ ҙә атырбыҙ, һунарсы булмаһаҡ та, тоҫҡай белербеҙ әле.

Был ғүмеренәсә һуғыш майҙанын күрмәгән ире еңел генә уйланы. Баралар ҙа, бәреп-һуғып осоралар ҙа, әйләнәләр, имеш, анау йылды юл бирергә теләмәгән урыҫтарҙы туҡмаған һымаҡ.

Олоһо-кесеһе илашып, оҙатып ебәрҙеләр ир-егеттәрҙе. Йәме йәмшәйеп, туҙан ҡаплағандай ҡалды ауыл, кешеләрҙе лә шом баҫты.

Майкамал хат-хәбәр көтөп йөрәк һыҙлатты, күҙ талдырҙы. Ә был ваҡыт Мөхәмәтшакир фронттың алғы һыҙығында ине. Башта бер аҙна тирәһе винтовканы нисек тоҫҡарға өйрәттеләр ҙә, тауар вагондарына тейәп, ары ҡыуҙылар.

— Нисауа, еңербеҙ беҙ уларҙы, башҡорттар — батыр халыҡ, бынан бер быуат элек, французадарҙы эттәй олота ярып, Парижға ла беренселәрҙән барып кергәндәр әле, — тип этәсләнеп йөрөнө командир.

— Хаҡ һүҙ һөйләйһең, эфисәр әфәнде, әммә көрәшкәндә тел тик торһон, бил ныҡ булһын, — тип һалды аранан сая бер егет.

Оҙаҡламай мәхшәр ҡубып ятҡан алғы һыҙыҡҡа барып инде былар. Баш ҡалҡытырлыҡ түгел, шыжлап пулялар оса ян-яҡтан. Снарядтар гөрһөлдәп ярыла. Ә-һә, уҡ сөйҙөрөү, ҡылыс һелтәү генә түгел икән бында. Бурһыҡ ише, тиҙ-тиҙ генә ер ҡаҙып, шунда боҫорға мәжбүрһең. Абайламай күтәрелдеңме — бөттө баш, ҡалды муйын һерәйеп.

Бер тегеләр һөжүм итеп, бер былар кире ҡағып, көндәр үтте. Хат яҙыу ҡайғыһымы бында, өкө һымаҡ күҙ бәзрәйтеп, ҡайҙа нимә ҡыбырлай — шуға уҡталаһың. Ергә күмелеп ятып, ике-өс ай ғүмер артҡа тәгәрәне. Тиргә һаҫып, бетләп бөттөләр. Төрлө өндәмәләр ҙә тараталар окоптарға: был һуғыш беҙгә һис кәрәкмәй, батша ғәли йәнәптәре илдә ярлы-ябағайҙың ҡыҫымын туҡтатыу өсөн башты һуғышҡа килтереп тыҡты.

Әфисәрҙәр бөтөнләй киреһенсә һүҙ бутҡаһын ҡуйыртты: ғәҙеллек өсөн, азатлыҡ хаҡына үлемгә — үлем, ҡанға — ҡан барабыҙ. Хөрмәтле вә ғиззәтле батшабыҙ кемдең кем икәнен күреп тора. Уға тоғро бер һуғышсы ла ғәмгә тарымаҫ, һуңынан, еңеп ҡайтҡас, мохтажлыҡ

күрмәйенсә ғүмер кисерер. Шуның өсөн, төрлө алама ҡотҡоларға бирелмәйенсә, һуғышығыҙ, батыр һуғышығыҙ!

Әлбиттә, Мөхәмәтшакир аптырауҙа ине: кемгә ышанырға һуң бында? Батша бөтәһен дә күреп торһа, ниңә бетләтеп ятҡыра беҙҙе? Икенселәренең «Ирекле йәшәрбеҙ» тигән һүҙҙәренә лә илегеп барманы Шакир һалдат. Бында ниндәйҙер аңлашылмаған хикмәт бар, хәйләкәрлек йәшеренгән...

Мөхәмәтшакир афәт баҫҡан, пулялар тишкеләгән, снарядтар өңгән ергә һылашып йылға яҡын ғүмер үткәрә инде. Ваҡыты-ваҡыты менән «урра!» һөрәнләп алға уҡталалар, күпмелер ваҡыттан артҡа ташланалар. Тәү башлап биләгән позициянан һис ары китә алмайҙар. Оло яу юлдары кискән һуғыш суҡмарына әйләнмәһә лә, барыһын аңлағандай, үҙенсә фекер йөрөттө һалдат: бында еңеү яуланырға оҡшамаған, юҡ өсөн ябай һалдаттың йәне өҙөлә.

Шулай ҙа һөжүмгә ташланыу ваҡыты етте: шарт та шорт аттылараттылар ҙа, таңында атакаға күтәрҙеләр. Китте ике яҡтан атыш. Ҡан эсергә ташланған күгәүен кеүек, пулялар һыҙғырыша. Командирҙар алға ҡыуа, туҡтамаҫҡа ҡуша, йығылып-боҫоп ҡалырға иҫәп тотоусыларға атып үлтереү менән янай.

Хәйлә белмәгән, киң күкрәкле, һынсыл, таҙа һалдат Мөхәмәтшакир, йүгерә торғас, алғы рәткә үк килеп сыҡҡан. Бер аталар, бер яталар, бер түш менән шыуышалар, тағы алға сабалар былар.

Ауыҙ тултырып «Ур-ра!» ҡысҡыра-ҡысҡыра йүгергәндә шрапнель ярылмаһынмы алдында... Ҡысҡыра ла алмай ҡалды Шакир һалдат. Күҙ алдары томаланды, зыңлап башы әйләнде, кәңгелдәп барып ауҙы. Арьяғын һис тә хәтерләмәй ул. Кемдер өҫтөрәп барғанда ғына иҫенә килде. Уң яҡ ҡабырғаһы сатнап һыҙлауға ыңғырашып ебәрҙе.

— Түҙ, һалдат, бер аҙға, хәҙер ярҙам итербеҙ, — тип, тағы алға һөйрәнеләр.

Ниндәйҙер палатка эсенә индереп, гимнастеркаһын айыра йырттылар ҙа, һәрмәп-һыйпап тикшерә башланылар.

— Ҡабырғаһын йәнсеткән, — тип һығымта яһаны аҡ халатлы, һаҡаллы ир. — Лазаретҡа оҙатығыҙ, уның өсөн һуғыш тамам хәҙер.

Лазаретта ай самаһы ятты яралы Шакир. Йәнселгән ҡабырға тапҡырынан тән итен ярып, операция яһанылар. Һыҙланыу яфаларын һөйләп тораһы ла, аңлатаһы ла түгел. Шулай ҙа, күпмелер ятҡас, төҙәлеүгә табан барҙы яраһы. Аяғына ла баҫты хәҙер. Уны, ныҡлап тикшереп ҡарағандан һуң, һуғышҡа яраҡһыҙ тип таптылар.

— Ҡайғырма, һалдат, бер ҡабырғаһыҙ ҙа йәшәйҙәр, әллә күпме ғүмер кисерерһең әле. Өйөңдә әкренләп эшләп йөрөрһөң, — тинеләр ҙә, оҙатыу яғын ҡаранылар.

Ауылға ул яралы һалдат булып ҡайтып төштө. Һәй ҡыуаныуҙар. Майкамалы йәш ҡыҙҙар шикелле осоп-ҡунып йөрөй. Балалары уратып һикереште. Ауыл халҡы йыйылды. Майкамалдың ире юҡта тормош көтөп ыҙаланған донъяһы яҡтырып китте. Ғәрип булһа ла, ир ир инде ул, балаларға һөйөклө атай.

Яра яйлап уңала барҙы. Еңелерәк эштәргә лә йәбеште Мөхәмәтшакир. Ир өйҙөң терәгенә, Майкамал теләгенә әүерелде. Оҙаҡламай ҡабырғаһыҙлауы ла онотолғанда бер генә һиҙҙереп алыуға күсте. Тормош үҙ урынына ултырҙы. Йыл самаһы үтеүгә һигеҙенсе булып ир бала донъяға килде. Исемен Кәшбелғилем тип атанылар.

Артабан да ғаилә ишәйә барҙы: Ҡәнзелғилем, Мөхәмәтйән биләүҙәргә биләнеп, киндер туҡыма менән төпләнгән ҡабыҡ сәңгелдәктә тирбәлеп үҫте. Һигеҙ — ир, ике ҡыҙ баланы аяҡҡа баҫтырыу, ай-һай, ниндәйерәк михнәттәргә тарытмаған икән?..

...Майкамал күҙ ҙә йоммай таң аттырҙы. Ире лә ыуалана-һыҙлана, башынан кисергәндәрҙе урыҡ-һурыҡ хәтерләп, таңғаса аңҡы-тиңке килеп ятты. Табиптарҙан да алдараҡ, ирҙәрен эйәртеп, Бәҙеғолъямал менән Фәрхиямал килеп етте. Бер аҙҙан улдары ла ишек асты. Бала үҫтереү бер этлек, изгелектәрен күреү мең шатлыҡ — атайҙары өсөн йөрәктәрен һурып бирерҙәй улдары, ҡыҙҙары, кейәүҙәре бар.

Килеүселәрҙе палатала оҙаҡлап тотманылар. Шәфҡәт туташы барыһына ла сығып торорға ҡушты.

— Дөрөҫөн генә әйтәм: хәле яҡшынан түгел, түш ҡаплама һөйәге бер нисә урындан сатнаған. Ентекләп тикшереп, дауаларға кәрәк, — тине табип, йыйылыусыларға ҡайтырға ҡушты.

— Әсәйем урынына мин ҡалып торһам да ярар ул, — тип, Фәхриямал табип алдына баҫты.

— Иң өлкәне булараҡ, атайҙы бағыусы — мин. — Мөхәмәтша үҙенең өҫтөнлөгөн белдерҙе.

— Дөрөҫ, өлкән ағайыбыҙ ҡалһын, мулла ла ул, доғалар уҡып ултырыр, — тине Ғәйнелғилем.

Табип быларҙың бөтәһе лә бер туған икәнен белгәс, баш сайҡаны, ғәйрәтле ҡарт икән, ҡеүәтле ир. Унан, үпкәләтмәҫкә теләптер, бөтәһен дә үҙенә яҡыныраҡ саҡырҙы.

— Атайығыҙҙы һаҡлап ултырыусы кәрәкмәҫ инде. Үҙегеҙҙе лә, уны ла бимазаламағыҙ, ҡайтығыҙ. Алмашлап килгеләп йөрөрһөгөҙ, йәме, — Майкамалға өндәште: — Апай, һеҙ ҙә ял итегеҙ, йонсоп та киттегеҙ, буғай.

— Йонсоу ҡайҙа ул, юҡ, юҡ, — Майкамал өлтөрәп тороп баҫһа ла, табип ҡарарынан ҡайтманы.

— Ағай ныҡ әле, бирешмәҫ. Ҡарар кешебеҙ бар беҙҙең, — тип ҡырт киҫте.

Мөхәмәтшакир ағай айлап ятты дауаханала. Хәле күпмелер еңеләйә биргәс кенә ҡайтырға рөхсәт иттеләр.

— Бер үк эшкә йәбешә күрмә, һаҡла үҙеңде, — тип киҫәтте табип.

Өйҙә үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәне Шакир. Балалары алдында еңел йөрөһә лә, бер ҡараҫҡыға оҡшатты үҙен. Ҡул ҡаушырыуҙы һис белмәгән кеше, һике өҫтөндә мендәргә һөйәлеп, һеңгәҙәп ултыр әле, бошонорһоң да шул! Башта, саф һауа кәрәк миңә, тип, ихатала йөрөштөрҙө. Ундағы юҡ-барға ла — бер ағас арҡыры, икенсеһе буй ятһа ла көйәләнде.

Хужалыктағы бөхтәлек йәшәйештең төп ҡағиҙәһенә әйләнгәйне уға. Мөхәмәтйәнен дә орошторол ала.

— Йорт-ҡураға таҙалыҡ кәрәк, улым. Кеше бит иң тәүҙә һинең кемлегеңде ихатаға ҡарап баһалай. Олатайың иҫән булһа, был күренешкә түҙмәй, ҡайыҙлап та алыр ине әле үҙеңде, — тип малайын йүгертә генә.

Нишләһен Мөхәмәтйән, ағалары-апаларының бөтәһененң дә үҙ донъяһы, үҙ ҡоймаһы тигәндәй. Ғаилә ҡорорға өлгөрмәгән Фәтҡел ағаһын армия хеҙмәтенә алып киттеләр. Төп йорттағы бөтә хәстәрлек Мөхәмәтйән елкәһендә хәҙер. Атаһын һуҡрандырмай ғына, баш баҫып эшләргә лә эшләргә. Күрше ауылға уҡырға ла йөрөргә кәрәк.

Юҡ шул, ауырыу атай тынғы белмәне барыбер: тәүҙә әкренләп, абайлап ҡына, һүтелә башлаған кәртәләрҙе ҡаҡҡылаланы. Быны күреп, Майкамал да атлығып килеп сыҡты.

— Ҡуй, атаһы, йәбешмә һин ундай эшкә, — тип балта-сүкешен тартып алып, үҙе ирҙәрсә бөтмөр тотондо.

— Мине эшкинмәгәнгә һанайһыңмы инде? — Үпкәләй Шакиры. — Арыулана барам шай, күкрәк сәнсеүе артыҡ һиҙелмәй ҙә. — Үҙе тешен ҡыҫып, оҙаҡ ҡына һыҙланып ултыра. Тик Майкамалына белдермәҫкә тырыша.

— Эх, колхоз эшенә сығаһы ине лә ул. Үҙебеҙ төҙөгән колхоз бит, бына тигән атымды тапшырҙым халыҡ файҙаһына. Шул атымды егеп, һабан һөрәһе урынға...

— Ауыҙыңды ла асма, колхоз нығынды хәҙер, һинән башҡа ла эшләүселәр етерлек, һаулығың хаҡында уйла, — тип тыйып ҡына бара Майкамал.

Бер-бер артлы асылып-ябылған китап бите һымаҡ, көндәр үтә торҙо. Ҡышҡы һыуыҡтар һүрелеп, йылмая-йылмая яҙһылыу йылы нурҙарын бөрктө, ҡара ергә лә баҫылды. Йәнләнде лә, йәмләнде лә бар тирәяҡ. Мөхәмәтшакир үҙенең аяҡҡа баҫыуын тойғандай хәҙер, Майкамал да тынысланғандай.

Бер көндө ат һарайына юлланды атай кеше. Үҙенең дөлдөлөн күреп ҡайтҡыһы килде. Нисек йәшәй икән малҡайы, тәрбиә етешәме? Уны күреү менән алаша ҡолағын ҡайсыланы, сыңлатып кешнәп ебәрҙе. Танины, әй, танины, онотмаған. Бала шикелле ҡыуанды Мөхәмәтшакир. Ялынан һыйпап, яңағына битен терәп, оҙаҡ иркәләне атын. Алаша ла, бер кинәнес тапҡандай, бышҡырып, баш һелкеп ала. Туҡта, ниңә бойоҡ һымаҡ аты, илағандай, күҙенә йәш тулған.

— И-и, минең яҡын юлдашым, һинең менән күпме саҡрымдар гиҙҙек, күпме изгелегеңде күрҙем, инде мирға хеҙмәт итәһең, олоғайып та бараһың, ябығып та киткәнһең, күп эшләтәләрме ни? — тип, кеше менән һөйләшкәндәй, йылымыс-йыуаныс һүҙҙәр әйтте Мөхәмәтшакир ағай.

Тыңлаусан, көслө ат ине алаша. Ауыр йөктәрҙе лә һөйрәп сығарыр. Яҡшы атҡа эйә күп, колхозда ла һәр кем уны егергә тырышты, ышаныслы, эште ыңғайлатырлыҡ. Ат һарайында эшләгән Мөхәмәтзакир улы тыйып та ҡарай атаһын.

— Һиңә күп йөрөргә ярамай, атай, алаша былай ҙа яҡшы тәрбиәлә. Ҡайтып ят, тынысланып.

Улы әйтә лә ул, атаһы тиҫкәреләнә, тағы килә. Уның өсөн ат һарайына килеүҙәре бер ғәҙәткә әйләнде. Иртән тороу менән аяғы шунда тарта. Алашаның да хәлен белер, кешеләр менән дә һөйләшер, исмаһам. Ағайҙы, әлбиттә, күптәр ихлас ҡаршылай.

— Әллә тынғылыҡ тапмайһыңмы, ағай, көн дә иртәләп килеп етәһең? — тинеләр башта, ғәжәпһенеп.

— Минең дә бит йәнем бар, белгем килә, күргем килә.

Эшкә мәшғүл йәш-елкенсәк тә ошонда ылығып китте күмәк хужалыҡҡа күскәс. Тегеһен-быныһын һорап, ҡыҙыҡһыныусылар ҙа бар йәштәр араһында. Өлкәнерәктәр Мөхәмәтшакирҙы күрһәтә.

— Ана ағайығыҙ күпте кискән кеше, һорашығыҙ үҙенән, өйрәтер ул, — тип кенә ебәрәләр.

Шакир ағай быға шат, иренеп тормай, сбруйҙарҙы нисегерәк йүнгә килтерергә, арба-тәртәне рәткә һалырға өйрәтә. Колхозға элек ярлы йәшәгән, ат аҫырар мөмкинлеге булмаған кешеләр күберәк ойошто бит. Шуларҙың балалары ҡыҙыҡһына. Ағай өйрәтә: сөйөлдөрөктө ошолай тарталар, бына былай бәйләйҙәр, юлда тағалып китерлек булмаһын; арҡалыҡты шул саҡлы күтәрәләр, ат боғаҙын ҡыҫмаһын, ҡамыт һуҡмаһын, нығыраҡ күтәрһәң — муйынын, аҙыраҡ булһа — елкәһен сейләндерә аттың; бауырғалыҡты ат тәненә ҡыҫып тартырға ярамай, юртырға ҡамасаулай, сей барлыҡҡа килтерә һәм башҡалар.

Мөхәмәтшакирҙың өсөнсө улы бригадир итеп тәғәйенләнгәс, атаһының ошолай йөрөүен килештереп тә бөтмәгәйне. Төрттөрөп, былай тип ала:

— Һине, атай, ат белгесе итеп беркетәйекме әллә? Өйрәтерһең баласағаны көн буйы ошонда йөрөп.

— Ғәйепме ни, белһендәр тим шул. Донъябыҙ атҡа бәйле, ат заманына ҡалғанбыҙ бит. — Атай үҙенсә аңланы.

Бер көндө буҫлығып, һаташып бер булды Мөхәмәтшакир ағай. Күкрәге һыҙлап, йөрәге сәнсеп-сәнсеп алғанлыҡтанмы, тынысһыҙ үтте төн. Йоҡо аралаш төшөндә ата-әсәһен күреп, һиҫкәнеп уянды. Атаһы Ҡыйҙашҡа ат һыулатырға киткән улын саҡыра, имеш. Хатта орошоп та ала: «Нишләп оҙаҡлап йөрөйһөң, мин һине күптән көтәм бит инде. Өйҙә утын бөткән, урманға барып ҡайтаһы бар. Бер юлы Мәүлиҙәгә лә килтереп ауҙарырбыҙ», — тип, ҡул иҙәй. Әсәһе ҡаршы төшә: «Йөрөмәй торһағыҙ ҙа ярар ине бөгөнгә, эш ҡушаһың да йөрөтәһең үҙең менән шул баланы, һис тынғы бирмәйһең». Имеш, ҡосағына ҡыҫып һөйә улын: бәләкәсем, төпсөгөм, йәнәһе. Гел киреһен, үҙе урынында атаһын күреп һаташып бөттө.

Шулай һөйләшкәндә ҡояш байыны. Ҡапыл ғына ҡараңғы төшә башланы. Киске шәфәҡ алһыулығы һүрәнәйеп, әңер ҡапланы ер өҫтөн...

Иртәнге һауала еңелерәк булмаҫмы тип, ағай ихатала йөрөштөрҙө. Байтаҡ ваҡыттан атаһының, әсәһенең ҡәберҙәренә зыярат ҡылмауына

ла эсе бошоп, күңеле әрнене. Аяҡтары шунда тартты был юлы. Атаһы менән әсәһенең ҡәбере йәнәшә ине. Таҙа, тәрбиәле.

— Аллаға шөкөр, балалар, ейәндәр эҙ һыуытмаған, килеп йөрөйҙәр ҡартаталары, нәнәйҙәре янына, — тип уйланды Мөхәмәтшакир, мәрхүмдәрҙең тере һынын күҙ алдына килтереп. Эстән генә аяттар уҡып алды.

Ҡайтышлай йәнә ат һарайына һуғылды. Ҡояш та хәтһеҙ генә күтәрелеп, нур көлтәһен тарата.

Күптәр эшкә китеп бөткән, арбалар һирәк кенә ҡалған. Ат ҡараусылар ҙа күренмәй, йәш ҡолонло бейәләрҙе болонлоҡҡа ҡыуа киткәндәр, ахырыһы. Тик бер малай ғына ат егергә маташа.

— Үҙең генә килдеңме ни, улым? — тине Мөхәмәтшакир малайҙың хитланыуын күреп.

— Үҙем генә шул, әсәйем менән үпкәләшеп, атайым беҙҙе ташлап ҡалаға сығып китте... Нисегерәк егергә әле, бабай?

Мөхәмәтшакир малайға өйрәтеп ҡараһа ла, буйсан булмағас, ат башына ҡамыт та кейҙерә алмай.

— Ҡайҙа бармаҡсыһың һуң?

— Өйҙө һыларға балсыҡ килтерергә тигәйнем.

— Үҙең генәме? — Малайҙың яңғыҙы ни ҙә булһа ҡыла алырына шикләнде Шакир ағай.

— Юҡ, апайым менән икәү барабыҙ.

— Ә-ә, улайһа, ярар... Ҡана, бир ҡамытыңды. — Ағай, ҡымтаныпҡымтанып, ҡамыт та кейҙерҙе, сөйөлдөрөгөн дә үҙенә тартырға тура килде. Ат егелде. Шунда ғына арбаның артҡы тәгәрмәсе ҡойолоп төшөргә торғанын күрҙе.

— Былай булмай инде, улым, тәгәрмәсен алмаштырырға кәрәк, — тип, башҡа арбаларға күҙ һалды. — Анауҙы һалдырып килтерә алырһыңмы?

— Алырмын, бабай, миндә көс күп ул. — Малай беләген йыйып, саҡ ҡына бүлтәйгән мускулын күрһәтте.

— Алай икән, килтер шул тәгәрмәсте.

Малай яурынын арбаға терәп, тәгәрмәсен һурырға маташты. Юҡ, булдыра алмай, быуыны шыйыҡ әле уның. Бынына ла ыңғырашып ҡына ярҙам итте Мөхәмәтшакир. Күкрәгә сатнағандай үҙенең, тәне буйлап әсе һыҙлау үтте. Инде тәгәрмәсте кейҙерәһе бар. Ай эттәгенәһе, бер кем дә күренмәй, исмаһам! Башҡа саҡта тулып йөрөйҙәр ине... Ҡайҙа Мөхәмәтзакир улы?

Нишләргә инде, малай йәл, етем бала. Эш тип яныр йөрөгән була үҙе. Нисек тә ярҙамлашырға кәрәк.

— Мин арбаны күтәреп торайым, һин тиҙ генә бынау ватыҡ тәгәрмәсте сығарып, күсәргә ошоноһон ултырт, — тип йәбеште ағай.

— Ярар, тиҙ генә эшләрмен, бабай.

Мөхәмәтшакир эйелә биреп арбаны күтәреүе булды, күкрәген ярып йәне атылды тиерһең, ыңҡ итеп сүгәләне, ергә тәгәрәп үк китте.

Малай уны-быны аңламаны, тор, бабай, тип, ҡулынан тартҡыланы. Шакир иһә иҫ-аҡылын юя башлағайны инде. Ошо мәлдә ат һарайына Мөхәмәтзакир килеп инде, атаһын күреп ҡобараһы осто. “Атай!“ — тип ҡысҡырып, ерҙә бөгәрләнеп ятҡан кәүҙәгә йәбеште.

Мөхәмәтшакир ағайҙы өйөнә илтеп, түшәккә һалдылар. Ике көн ятты ул иҫһеҙ. Өсөнсө көнөндә фани донъянан китеп барҙы. Бөтә ауыл йыйылды уны оҙатырға. Оҙаҡ үкһеүҙән Майкамал апайҙың күҙҙәре шешенде, күрәләтә бите ябығып ҡалды. Уны йыуатып, бер-бер артлы балалары ҡосаҡҡа алды.

## Йөрәк ярғыс хәбәр

Йылдар, ғүмер шаңдауҙарын яңғыратып, алыҫлаша бара. Уларҙың ҡайһы берҙәре һиҙелмәй генә мәңгелеккә инеп юғала. Шундайҙары ла бар уларҙың — күңел күгендә урын алып, йәшәүен дауам итә.

Майкамалдың күңел күген биләгәне — Мөхәмәтшакир менән ғүмер иткән йылдар йомғағы — һүнмәҫ бер есем һымаҡ, балҡышын һибә. Ә ун бала — ун йондоҙо, һәр береһенең үҙ нуры бар, һәр береһе ҡәҙерле. Уларҙың да төрлө тарафтарҙа үҙ йондоҙлоғо ҡалҡҡан, үҙ тормошо тамыр йәйгән. Әсәләре төпсөк улы Мөхәмәтйән менән ғүмер кисерә хәҙер. Ҡасандыр гөж килгән йорт тып-тыныс та буп-буш, күсе осоп киткән умарта ише... Хәйер, буш тип әйтеү дөрөҫ булмаҫ, юҡ, ул яңғыҙ түгел, балаларының күбеһе ауылда төпләнде, үҙҙәре, ейән-ейәнсәрҙәре килеп йөрөй. Әсәгә булышалар, ярҙам итәләр, йәиһә алып ҡайтып, аҙналар буйы түрҙән төшөрмәйҙәр. Аталарынан ҡалған миһырбанлыҡ, киң күңеллелек, кешегә ярҙамсыллыҡ дауам итә. Әшнәһе Мәүлиҙә лә әйләнгән һайын Майкамалдың ишеген шаҡый. Үҙ кеше инде ул бында күптән. Мөхәмәтйән дә, апайҙы, ауырыу ҡыҙы Сәлисәне йәлләп, утын ташып, киҫеп бирә, күҙ терәгән һарыҡ-кәзәһен иҫән-һау аҫыраһын өсөн, бесәнен дә әҙерләп бирә. Егет ҡорона ингән Мөхәмәтйән тормош ҡосағында изгелек менән йәшәргә кәрәклекте ата-әсәһенең аманаты итеп аңлай.

Шулай ике ғаиләгә бер терәк шикелле йәшәп ятҡанда, Мөхәмәтйәнде армия хеҙмәтенә алып киттеләр. Әсә менән һалдат улы араһын хаттар ғына бәйләй. Ярай әле улы йыш яҙа. Илдең көнбайыш сигенән килгән ҡайнар сәләмдәре әсә юҡһыныуын бер аҙ баҫа төшә... Баҫа микән һуң әле, нәҡ шул көнбайышта ил тыныслығы боҙолорға тора, тигән хәбәрҙәр ҙә ишетелеп ҡала. Көнбайышта старшина хеҙмәтен дауам иткән Фәтҡелғилемдең дә һиҙҙерер-һиҙҙермәҫ кенә шундайыраҡ юлдар яҙылған хатын уҡынылар.

...Бөгөн дә алһыуланып матур таң атты. Йәйге ҡояштан әүәлерәк уянырға күнеккән Майкамал апай мал-тыуарын ҡараштырҙы. Һыйырын һауҙы, һөттөң бер өлөшөн сәйгә тип мөгәрәпкә һалҡынға төшөрҙө, ярты күнәк самаһын айыртырға әҙерләне. Ейән-ейәнсәрен ҡаймаҡ менән һыйлар.

Ҡояш күтәрелә башлағанда көтөү ҡыуҙы. Ҡояшҡа күҙ төшөрҙө: ул, ниңәлер, ғәҙәттәгенән ҡыҙылыраҡ, дәүерәк булып күренде. Быға артыҡ

иғтибар ҙа итмәне, Хоҙай ҡөҙрәте инде ҡыҙыллығы ла, дәүлеге лә, иртәнге ҡояш бит, тип кенә уйланы.

Әллә нишләп Ҡыйҙашты күргеһе килеп китте Майкамал апайҙың. Йыл да ошо йылғаны үҙ иткән бер нисә пар ҡыр ҡаҙҙары төшә, быйыл да килделәрме икән? Ауыл халҡы танып бөткән уларҙы, һағынып, ҡунаҡлауын бер ғорурлыҡҡа тиңләп, һоҡланып ҡаршылайҙар.

Бөгөн йылға өҫтө һөттәй ҡуйы томанға уралған. Алтынға мансылған ҡояш нурҙары, үтә тишеп, томанды таратырға теләгәндәй... Томандан асылыуын көтөп, таллыҡ буйына ла төштө Майкамал. Нисек түҙһен күрмәйенсә таллыҡҡайын. Ошонда бит башлап Мөхәмәтшакир менән осрашты, ошонда бит мөхәббәт сәскәһе таждарын асты!.. Хәтирәләрен күңел ҡумтаһынан аҡтарып күпмелер йөрөгәс, ҡыйғаҡ-ҡыйғаҡ тигән тауышҡа һиҫкәнеп китте. Ә-һә, ҡыр ҡаҙҙары килгән икән, ырыҫ-ҡот ҡундырһын еребеҙгә! Шыйыҡлана барған томан аша ҡыр ҡаҙҙарын күҙәтте Майкамал. Шакирының: «Беҙ ҙә ҡыр ҡаҙҙары кеүек айырылмаҫ булып йәшәрбеҙ», — тигән һүҙҙәрен иҫенә төшөрҙө. Туҡта, һанап ҡарайым әле, нисәү икән быйыл: берәү, икәү... бишәү. Биш пар... һәм тағы ла берәү... Аһ-аһ, ниңә анауһының пары юҡ, тегеләрҙән ҡырҙараҡ яңғыҙы ғына йөҙә. Үҙе әйләнгән һайын һағышлы тауыш менән ҡыйғаҡлап ебәрә. Уй, Хоҙайым, юғалтҡанмы ул парын, берәй яуыз йөрәкле бәндә атып төшөргәнме беҙгә ҡайтҡан мәлендә... Оҙаҡ ҡына күҙ баҡҡандан һуң, башын баҫып, өйөнә табан атланы апай.

Ҡайтышлай урамда өйкөм-өйкөм халыҡ йыйылғанына иғтибар итте. Ниңә халыҡ ҡупҡан был тиклем, йыйылыш-фәлән үткәрмәкселәрме? Әллә берәйһенең вафатымы? Ирҙәр ҙә, ҡатын-ҡыҙ ҙа, ҡайһы бер баласаға ла шунда өйкөлгән. Бесәнгә төшөргә ваҡыт еткәнме, тиһәң, иртәрәк шикелле әле.

Яҡынлашыу менән, төркөмдән айырылып, янына Мәүлиҙә килде.

— Майкамалым, әйкәйем, бәлә, бәлә... — Тамағына тығылғандай, һүҙен ослай алмай тотлоҡто ул.

— Нимә шул саҡлы, ауылды ут ялмағандай...

— Мин әйтә алмайым... әйҙә, халыҡ янына.

Майкамал кешеләр эргәһенә килеү менән Ғәйнелғилем улы ҡосағына алды уны.

— Атаҡ-атаҡ, Мөхәмәтзакир ҙа бында икән, килендәрем дә килгән, нишләп бөтәгеҙ ҙә ҡупҡанһығыҙ? — Һаман да аптырай әсәһе.

— Ҡупҡанбыҙ шул, әсәй, бөтә ил ҡупҡан бөгәсә таңда... Гитлер беҙгә ҡаршы һуғыш асҡан,— тип аңлатмаҡсы Ғәйнеле.

Гитлерҙең нимәме-кемме икәнен белмәһә лә, ҡайһы берәүҙәрҙең еүешләнгән күҙҙәрен һөртөүенән яман бәлә килеүен төшөндө Майкамал.

— Илгә дошмандар ябырылған, апай, немец фашистары, әле генә райондан шылтыратып әйттеләр. — Бригадир ҙа арҡаһынан һөйә-һөйә бер үк һүҙҙе тәкрарлағас, әсәнең дә йөрәге жыулап, күҙенә йәш тығылды.

Һәр кемдең йөҙөнә ҡараңғылыҡ шәүләһе яғылған, тәрән кисерешле уйға сумып, баш эйгәндәр. Ошондай матур, яҡты ҡояшлы иртәлә, әйтерһең, бәндә алдына ағыулы ҡара йылан дәшһәте арҡыры төшкән...

Бер нисә көндән әзмәүерҙәй ирҙәрҙе, һөлөктәй егеттәрҙе һуғышҡа оҙатыу башланды. Китеүселәр яңғыратып йырлап, пар аттарҙа урамдар буйлап үтте. Һәр кем урамға атлыҡты был көндө; кем нисек түҙһен — ирҙәр китә, атайҙар китә, улдары китә, әсәләре, ҡатындары, йәрәшкән йәнкәйҙәре өҙөлөп, йәш түгеп, оҙаҡҡамы, аҙғамы, әллә мәңгелеккә айырылышыу дусарында ҡала...

Ауыл бушай, ирҙәр һирәгәйә бара. Тағы китеүселәр, тағы хушлашыуҙар. Ныҡ затлы ир-ат һыр бирергә тырышмай. 1941 йылда һуғышҡа китеүселәр араһында Майкамал апайҙың запастағы лейтенант улы Кәшбелғилем дә бар ине.

— Беҙ еңербеҙ, беҙ ҡайтырбыҙ, ошо саҡлы дәү илебеҙгә нимә ул фашист яуы, ҡыйратырбыҙ ҙа ташларбыҙ, — ти дәрт-дарманы ташып торған улы, теге ваҡытта атаһы әйткән шикелле.

— Көтөгөҙ беҙҙе, тиҙҙән осрашҡанға тиклем...

Майкамал апай бөгөлөп төштө: уның һигеҙ улы һигеҙ яҡтан һиҫкәндерә. Төн йоҡоларын ҡасырып, шулар хаҡында уйлана, әлеге көндә көнбайышта армия хеҙмәтендә йөрөгән Фәткелғилем, Мөхәмәтйән өсөн борсола. Ленинград ҡалаһында йәшәгән Мөхәмәтсафа улының яҙмышы нисек, ни хәлдә улар, ут эсендә ҡалдылармы, иҫән-һауҙармы икән? Ҡош телендәй хат-хәбәрҙәре лә килмәй, исмаһам...

1942 йылдың башында әсә, уның менән бергә туған-тыумаса, килендәре, бала-сағаһы, бөтә ауыл Ҡәнзелғилемде, Мөхәмәтзакирҙы, Ғәйнелғилемде һуғышҡа оҙатты. 1943 йылда иң өлкәне — Мөхәмәтшаға, Фархиямал ҡыҙының ире — Дәүләтбай кейәүгә лә сират етә.

## Һалдат улдары — яу юлдары

Был бәйәнде һигеҙ яугирҙең өлкәненән башлап, йәше буйынса һәр береһенә туҡталып дауам итербеҙ.

### Мөхәмәтша

...Мөхәмәтшакир Майкамалын атай йортона алып ҡайтҡас, Мөхәмәтлатип ағайҙан бигерәк Алтынбикә апай ҡыуанды. Көтөп алған килен өйгә йәм биреп килеп инде. Егәрле килен иҙәнгә сүп ҡундырмаҫ, тигәндәй, йорт эсе ялт итеп ҡалды. Мал-тыуарға ла ылыҡлы, таң менән, моңло көй сығарғандай, сызлатып, һыйыр һауырға керешә. Әрәм-шәрәм итмәй, ҡаймаҡ, май әҙерләп ҡуя. Ауылда ҡотло ҡул исеме алған Зәйнәп ҡоҙағыйының бар булмышын үҙенә йыйған килене лә.

Тәүге балалары тыуғас, Шакирының түбәһе күккә тейҙе. Шалҡандай таҙа, ап-аҡ малай, күҙ теймәһен, Хоҙайым! Уға Мөхәмәтша тип исем ҡуштылар. Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарына өндәшеп, яҡындарҙы йыйып, шаулатып бәпес туйы үткәрҙеләр, бүләктәр бирештеләр. Мөхәмәтшакир йомро-йомшаҡ тәүге сабыйын ғүмеренең дауамына юрап, хатта үҙенең исемен, ҡыҫҡартып, фамилия итеп бирҙе: Шакиров Мөхәмәтша

Мөхәмәтшакир улы. Был 1901 йылда ғаилә өсөн оло ваҡиға булып теркәлде.

Мөхәмәтшакир менән Майкамал улдарын ҡәҙерләп үҫтереп, уҡымышлы кеше яһарға хыялланды. Йәше етеү менән мәҙрәсәгә бирҙеләр.

Муллаға шундайыраҡ теләген дә белдереп ҡуйҙы Мөхәмәтшакир:

— Улым — һиңә, белеме — халыҡҡа, өйрәт Хаҡ Тәғәлә юлына, ишан хәҙрәттәре, алтыны уҡ булмаһа ла, көмөш тәңкәләрен сыңлатып һалырбыҙ усыңа.

— Борсолмағыҙ, тыңлағанға — Ҡөрьән һабағы, тыңлауһыҙға мәзин таяғы, күңелен сафландырырбыҙ, — тип мут йылмайҙы хәҙрәт.

Мөхәмәтша тыңлаусан шәкерттәрҙең береһе ине. Ҡөрьән кәрим аяттарын яғымлы тауыш менән яттан көйләр ваҡыт етте. Мәҙрәсәнән ул муллалыҡҡа рөхсәтнамә алып сыҡты. Артабан ҡалаға барып һиммәтлерәк мәҙрәсәлә уҡырға теләге бар ине лә. Ләкин донъялар боларып тора, ата-әсәһен, береһенән-береһе ваҡ туғандарын ҡалдырып китергә ҡыйманы.

Боларыштың еле былар ауылына ла һуғылды. Берәүҙәр ҡәҙимге идаралыҡты ҡулдан ысҡындырмаҫҡа, икенселәр яңы тормош ҡормаҡҡа, аҡҡа-ҡыҙылға бүленеп, бер-береһенә ҡаршы һуғыша башланы. Аҡтары ла, ҡыҙылдары ла Кәпәй ауылын урап үтмәне. Бер-береһен ҡыйратаҡыйрата, әле аҡтар, әле ҡыҙылдар баҫа ауылды. Ата улын, инә ҡыҙын белмәгән заманға килеп терәлде был донъя. Ҡыҙылдары килһә лә аҙыҡ таптыра, аҡтары ла өй беренсә мал-тыуар йыя, аттарҙы ла, йүгән кеймәҫ тайҙарҙы ла етәкләп алып сығалар. Әйтеп ҡара берәй һүҙ ҡаршы, хәҙер винтовкаһын тоҫҡай.

Мөхәмәтшакирҙың да йәш, һабантуйҙа ал бирмәҫ, бына тигән сапҡынын эләктерҙе аҡ офицер.

— Ай, хороша лошадка, йылҡылдап тора! — тип маҡтаны талап алған хайуанҡайҙы.

Һөмһөҙлөгө сиктән ашты быныҡ, Мөхәмәтшакирҙың яғаһына барып йәбеште.

— Арбаңды ла бир, беҙ бынан аҙыҡ, кейем тейәп китәбеҙ. Ошо атың менән үҙең дә беҙҙең отрядта барырһың.

Шакир ағай ни эшләргә белмәне. Аптырағас:

— Мин 14-се йылғы һуғышта ҡаты яраланған кеше, зәғифмен. Оҙон юлға түгел, өй тирәһендә лә саҡ-саҡ йөрөйөм, — тип, ҡотолоу юлдарын эҙләне.

Ҡыҙҙары, ҡоттары осоп, баҙға йәшенде. Береһенән-береһе бәләкәйерәк малайҙары ихатаға теҙелешкән. Янъял ҡубыуын ишетеп, Мөхәмәтша ла ҡайҙандыр ҡайтып инде, туғандарының янына барып баҫты. Бер-бер хәл тыуһа, атаһын яҡлашырға әҙер ине ул. Ни булһа ла булыр, бәреп йығасаҡ, балта төйҙәһе менән башын иҙәсәк этәсләнгән әфисәрҙең. Унан... унан ни ҡурғыға ҡасыр, эҙләһендәр әйҙә тәпәйҙәре талғансы.

Офицер ҡапыл икенсе төҫ алды.

— Былар һинең балаларыңмы?

— Беҙҙеке.

— Бына һинә зәғиф кеше!.. Ярар, балаларың хаҡына ҡалдырам үҙеңде. Анау оло малайыңды алып китәбеҙ, шәп аҡ гвардеец яһарбыҙ, күрерһең. Беҙ еңгәс, ауылыңа килтереп староста итеп ҡуйырбыҙ. Бәхетегеҙ асылыр унан...

— Мин бер ҡайҙа ла бармайым, ауылдың муллаһымын... Кем рөхсәт бирҙе һеҙгә халыҡты динһеҙ ҡалдырырға?! — Екерҙе Мөхәмәтша бар асыуына. — Хоҙайҙан ҡурҡығыҙ, исмаһам!

— Һинең дин — минең өсөн бер тин. — Мыҫҡыллап ауыҙ йырҙы әфисәр. — Ек йәһәтерәк атыңды!

Мөхәмәтша күкрәк киреп алдына баҫты тегенең.

— Екмәйем... Кеше талаусылар һеҙ!

— Ах, собака, шулай тиһеңме әле?! — Винтовкаһын егеткә тоҫҡап борҙо. — Атып йығам бит үҙеңде хәҙер!

— Ат, ат, әйҙә!.. Хөрлөк юлында һәләк булырмын. Ҡараһаҡал хажи шикелле.

— Әле һин халыҡты баш күтәрергә саҡырмаҡсыһыңмы? Беләбеҙ беҙ Ҡараһаҡалдың кемлеген.

Аҡылынан шашҡан был әҙәм аҡтығы винтовкаһының тәтеһенә баҫты. Яманлыҡ һиҙенепме, бер нисә айлыҡ ҡына көсөк тә сәүкелдәп өрөргә тотондо. Әфисәр, тоҫҡаған ҡоралын бороп, яңғыратып атып ебәрҙе. Эт, үҙәк өҙгөс тауыш менән илап, ергә тәгәрәне.

Атыу тауышына бер нисә һалдат йән-фарман ихатаға килеп инде. Арттарынан — өлкәнерәк икенсе бер әфисәр. Ул шунда уҡ һөрән һалды:

— Ниндәй атыш бында?!

— Бына, баш бирмәй маташа бынау маңҡа егет, — тип Мөхәмәтшаны күрһәтте атыусы.

— Нимәгә тыңламай?

— Атын егеп, беҙҙең отрядҡа ҡушылыуҙан баш тарта.

Урамға ингән офицер ҡобараһы осоп урынында шаҡ ҡатҡан Мөхәмәтшаға ҡараны.

— Ниңә ҡурҡаһың, беҙ кеше ашамайбыҙ.

— Мин — мулла, — тип ҡабатланы егет, телен саҡ-саҡ ҡыймылдатып.

— Мулламы? Бигерәк һәйбәт, күптән эҙләйбеҙ беҙ һинең кеүек йәш мулланы. Беҙҙең отрядта мосолмандар байтаҡ, аҙан әйтерһең, намаҙ уҡырһың, тәһәрәт алырға өйрәтерһең шуларҙы... Киттек, ҡарышыу яҡшыға алып бармаҫ, юғиһә.

Атаһы менән улы ҡараштары менән аңлашты, буғай, һиҙелер-һиҙелмәҫ баш ҡағып алды Мөхәмәтшакир. Шунан һуң ғына Мөхәмәтша атына ҡамыт кейҙерҙе. Атаһы ярҙамлашты, тәртәнең икенсеһен күтәреп, дуғаға ҡамыт бауын эләктерҙе. Шул арала эйелеп шыбырланы:

— Һаҡ бул, абайлап йөрө, берәй яйы сығыр әле.

Китте Мөхәмәтша аҙғын эт өйөрөнә эйәргәндәй. Ауылдан сығып урман буйына етеүгә, ҡыҙылдар ябырылды быларға. Ҡыҙҙы атыш, бөрөп бара ҡыҙылдар, бер нисәһен бәреп төшөрҙөләр. Көстөң өҫтөнлөгө һөжүм

итеүселәр яғында икәне асыҡ, табан ялтыратыу сараһы ғына ҡалды аҡтарға.

— Алға, алға! Ҡамауҙы йырып сығырға! — Ҡарлыҡҡан тауыш менән команда бирҙе теге өлкән офицер.

Ығы-зығы, буталыш, кемдә ниндәй ҡорал бар — ҡылыс менән һелтәнеп, штык менән төртөшөп, ата-ата юл ярыуға өлгәшә алды аҡтар. Һаман теге командир ҡарғалай ҡарҡылдауҙан туҡтамай:

— Ылаулыларҙы үткәрегеҙ башта, пехотаға оборона тотоу өсөн ергә ятырға, һыбайлылар, флангыларҙы һаҡларға!..

Мөхәмәтша атына бер генә дилбегә ҡаҡты, йомолдо йомро тояҡ, ҡыл ҡойроҡ ерәнсәй. Бөтәһен дә уҙып, ҡап-ҡара туҙан туҙҙырып саба бирә. Әллә яр буйына төшөп йәшеренергә лә ҡуйырғамы, тип уйлап та алғайны Мөхәмәтша, тик арттан һыбайлылар ҡыуып етеп килә. Тимәк, ҡыҙылдарҙан ҡотолғандар. Бер ҡурҡҡан эт өс көн өрә, тигәндәй, былар ҙа, ялға ла туҡтамай, йәһәтерәк алыҫыраҡ китеүҙе белә. Юғиһә, ҡыҙылдарҙың яңынан баҫтырыуы ихтимал.

Кисен бер урыҫ ауылы ситендә туҡтанылар. Бында уларҙы икенсе — ялға ҡалдырылған отряд ҡаршыланы. Бәлки, төп отряд ошолор әле, юғарыраҡ чинлы офицер килеп сыҡты.

— Нисек үтте разведкағыҙ? — тип һораны ул теге ҡарлыҡҡандан.

— Ҡыҙылдар барып тулған, ул яҡҡа юл бикле.

— Улайһа, разведка ебәрербеҙ. Топорино беҙҙең ҡулда булырға тейеш. Хәҙергә, давай, ял итегеҙ!

Егеүле аттар туғарылды, менгеләрҙең эйәрҙәре һалынды. Ике һалдатты аттар тирәһенә ҡарауылға ҡуйҙы отряд командиры.

— Һиңә лә, малайка, ошонда ҡалырға, биҙрәләп ташып, аттарға һыу эсер. Ана, улаҡты күрәһеңме, һыу ташы шунда. Ҡара уны, шәләй-вәләй булма, ишеттеңме? — тип фарман бирҙе был.

Мөхәмәтшаның асыуы килде “малайка“ тип әйтеүенә, оҙаҡ әрләп йөрөнө эстән.

— Хөрәсән, хәсис, сусҡа томшоғо, яһил, кафыр, гонаһ тулы ҡап ҡорһаҡ, әҙәм талаусы... Күрһәтермен әле мин һеҙгә... — Әллә күпме әр һәм янау һүҙҙәрен теҙҙе егет.

Ләкин теш ҡыҫып, ҡушылған эшкә керешә. Тыңламау мөмкин түгел: берҙән, аттар йәл, икенсенән, ғүмер бер генә килә, көсөктө атып йыҡҡан кеүек, күкрәгеңә пуля оҙатырға ла күп һорамаҫ ул ҡан эскес.

Штабтары ауыл ситендәге өй янында, буғай, был өсәүҙе ҡалдырып, бөтәһе лә шунда йүнәлде. Оҙаҡламай таш ярырҙай тауыш менән сусҡалар сарылдауы таралды. Атып йыҡтылар, күрәһең, бер-икеһен. Төтөн күтәрелде, ялҡын телдәре ялпылданы.

Һаҡтағы ике һалдат үҙ-ара һөйләшә:

— Һәй, сусҡа башын кимерһәң ине, ә!..

— Кит әле, юҡҡа ауыҙ һыуыңды ҡойма, сусҡа башы оҙаҡ бешә ул. Бына хәҙер генә ҡолағын өтөп ашаһаң...

— Ҡолаҡ әле һиңә, шыр һөйәк сирағы әләкһә лә ярап торор ине.

Тамаҡтың тамуҡҡа төшөрөүе көн кеүек асыҡ: әй хыялланды был икәү булмаған ризыҡты һайлай-һайлай.

Ысынлап та, усаҡ яғынан ел өтөк еҫтәрен килтерә башланы, теге икәүҙе тамшандырып. Оҙаҡламай ауыл ситендә аҡырып-баҡырып йырлағандары ишетелде.

— Эсәләр, — тип ҡуйҙы берәүһе, — бер стаканды ғолҡолдатһаң ине. Ух!..

— Мин, артынан бер тәғәм ҡапмай, аллы-артлы ике стаканды тондорор инем...

— Тондортторорҙар, тот услап, ана, улаҡтан ятып һыу һемер, — тип енләнеп китте өлкәнерәге. Ас кешенең асыуы яман, тигәндәре ошолор, моғайын.

Ярты төн самаһындараҡ былар янына йөнө йолҡонған әтәскә оҡшап торған, һөлдәһе ел өргәнгә лә кәңгелдәрлек ябыҡ, үҙе һонтор урыҫ килде.

— Барығыҙ, һеҙгә лә ит бар унда, һоғоноғоҙ!

Теге икәү йылт итеп кенә ҡалды.

— Ә һин нишләп тораһың, төн йөҙөндә бер ни булмаҫ бында. — Мөхәмәтшаға өндәште.

— Миңә ярамай хәрәм аш — сусҡа ите, — тип яуапланы егет.

— Ә-ә, мосолман, ярамаһа, ярығым, үҙең беләһең, — тине лә бер аҙ ҡыҙмаса һонтор арба өҫтөнә менеп ятты.

Мөхәмәтша арба тирәһендәрәк аяҡһыны. Йәтеш тә бит табан ялтыратырға, нисегерәк итергә һуң?

Һонтор хырылдай башланы. Китте, буғай, әүен баҙарына. Әйҙә, әйҙә, нығыраҡ йоҡла, Мөхәмәтшаға шул кәрәк тә. Арба янына килде. Һуш белмәй ята теге. Ваҡыт етте, нәҡ уңайлы мәл. Егет аты яғына ыңғайлап, бер-ике аҙым һаны. Туҡта, бер ҡоралһыҙ китергәме? Унда — винтовка, атып, башҡаларҙы күтәрер, ҡыуа сығырҙар. Төп башына ултыртырға кәрәк был һөлдәне.

Ипләп кенә арбаға эйелде Мөхәмәтша. Ҡосаҡлап ятҡан теге ҡоралын. Әллә муйынын борорға ла ҡуйырғамы, уға ғына көсө етерлек. Шунда уҡ уйынан кире ҡайтты: кешенең йәнен ҡыйыу оло гонаһ. Бәлки ул да ирекһеҙҙән йөрөйҙөр, көслөк менән алып киткәндәрҙер. Кемдеңдер ғәзиз балаһы бит, урыҫ булһа ла...

Шул ваҡыт һонтор ҡулдарын йәйеберәк ебәрҙе. Йоҡо ләззәтендә кинәнә был. Кинән, кинән... Мәхәмәтша, бесәй кеүек кенә һәрмәнеп, винтовканы ҡуйынынан һура башланы. Инде алдым тигәндә, теге ҡымшанып, ниҙер мығырланды. Һиҙендеме әллә?.. Урынында ҡатып ҡалды егет. Теге ашап-эскәнен төшөндә күрәме — сәйнәнә лә сәйнәнә. Унан икенсе ҡабырғаһына әйләнеп йәнә тынды.

Бер нисә минуттан винтовка Мөхәмәтша ҡулында ине инде. Эйелә биреп, аты яғына йомолдо. Аты, эйәһен танып, ҡаты бышҡырып ебәрҙе.

— Сеү, малҡайым, — тип хужаһы муйынынан һыпырҙы. Ат тынысланды.

Бер аҙ ғына фекер тупланы егет: арбаны ла егеп алырғамы әллә, унда өй беренсә талап алған кейем-һалым, таратыр ауылдаштарына... Ҡуй, баш иҫән булһа, кейем табылыр, һаҡланырға кәрәк, дөбөр-шатыр арба тауышына күтәреләсәк былар, бер йүгереп, ике һикереүҙә ҡыуып етәсәктәр... Атына һикереп менде лә осто Мөхәмәтша килгән юлынан. Артылышты артылғанда шарт-шорт атыуҙар ишетелеп ҡалды. Атһындар, шашһындар, уның сапҡын ерәнсәһен ҡыуып етеү түгел, ҡойроғон да күрә алмаҫтар.

Оҙаҡ елдерҙе Мөхәмәтша. Аты ла, мыш-мыш килеп, арый төштө. Ҡурҡыныс артта ҡалды, ниңә ҡабаланырға. Йүгән теҙгенен тартты ҡасҡын егет. Ерәнсә йомшаҡ ҡына юрғалап, үкелдәп бара башланы. Йәнә лә баш ватты Мөхәмәтша: өйгә һыпыртырғамы, әллә ҡыҙылдарҙы табып, ишеткәндәрен һөйләргәме башта? Ике урталағы хәстәр эсенә сумды. Һөйләргә кәрәк, күрһендәр «малайка»ның кем икәнен!.. Туҡта, нисек күрһен һуң «малайка»ны теге яуыз әфисәр? Әллә ҡыҙылдарға эйәреп үҙенә лә барырғамы? Ҡыҙылдар шулай ҙа әҙәплерәк, аш-һыу булһа, шуға ла мөрхәтләнә. Күҙ алартып, ҡайҙа атланырға белмәгән кәзә тәкәһеләй, ҡатын-ҡыҙҙың итәген йыртмай. Халыҡты ерле итәбеҙ, тиң итәбеҙ, тип тел сарлай. Ере, сабынлығы бар икән — ауыл халҡына ни кәрәк тағы?!

Шулай аңкы-тиңке килгәндә, талағына бүре йәбеште тиерһең, үрә һикерҙе аты. Мөхәмәтша үҙе лә шул секунд эсендә, кемдеңдер яман тондороуынан, аршын ярым тирәһе араға мәтәлләне. Шунда уҡ ҡулын шаҡарып, бәйләп тә өлгөрҙөләр, күҙен яулыҡ менән ҡоршанылар, һә тигәнсе күтәреп ергә баҫтырҙылар.

— Һин кем? — тип тамаҡ йыртты ир тауышы. — Аҡтарҙың разведчигымы?

— Мин... Мин — Мөхәмәтша.

— Исемеңде һорамайбыҙ бит... Ай, хәйләкәр, Мөхәмәтша, имеш, берәү. Разведчикмы, тибеҙ, ишетәһеңме?!

— Миңә ҡыҙылдарҙың командиры кәрәк, — тине, көскә телен әйләндереп, әсирлеккә төшкән егет.

— Һе, командир кәрәк берәүгә...

— Мин бик мөһим хәбәр әйтмәксемен уға.

Былар үҙ-ара шыбырлашты.

— Беҙгә әсирҙе барыбер командирға күрһәтергә, алып барайыҡ.

— Бәлки, ысынлап та, хәбәр килтергәндер.

Кәңәшләштеләр ҙә, тағы һоранылар:

— Ҡайҙан киләһең һуң әле һин?

— Аҡтарҙан ҡастым. Мине, ошо атымды ектереп, ылаусы иткәйнеләр ауылымдан... Кәпәйҙән.

— Ысынды һөйләгәнгә оҡшаған: иртән беҙ ҡайыҙлаған отрядта ылаусылар ҙа бар ине, — тине берәүһе.

Мөхәмәтшаны эткеләп тә төрткөләп байтаҡ ҡына юл атлаттылар. Атын да етәкләп алғандар икән, бышҡыра-бышҡыра килеүенән таный. Күпме барып, туҡтағас ҡына яулыҡты систеләр. Күҙе ҡамашып, ҡайҙа

икәнен дә аңламай торҙо егет. Бер палатка эсенә индереп, өрләктәй ағай алдына баҫтырҙылар. Ул йомшаҡ ҡына өндәште:

— Мин булам һин таптырған командир. Ниндәй хәбәр килтерҙең, ҡустым?

Мөхәмәтша ни күргәнен, ни ишеткәнен бәйнә-бәйнә теҙеп сыҡты. Командир кемделер үҙ янына саҡыртты. Инеүсе лә эфисәр кейемендә. Ярты-йорто таҡталарҙан арлы-бирле генә әтмәләнгән өҫтәлгә карта сығарып һалдылар.

— Егеттең һөйләүенсә, аҡ отряд Топориноға юлланырға йыйына. Бына бында, — тип бармаҡ йөрөттө командир карта өҫтөндә. — Ошонда, Сәрмәсән буйында туҙҙырырға кәрәк үҙҙәрен.

— Топорино янында беҙҙең Чеверев отряды хәрәкәт итә. Тиҙ генә сапҡын ебәрергә тейешбеҙ беҙ. Ағиҙелгә етер юлдарын киҫергә. Ағиҙелгә килеп төштөләрме — Колчак ҡалдыҡтары менән ҡушыласаҡтар. Сәрмәсәндең теге яғынан — чеверевсылар, арттарынан төшөп, беҙ ҡамап алырбыҙ. — Яңы ингәне пландары менән бүлеште.

— Дөрөҫ, дөрөҫ, — тип хупланы командир, — хәҙер үк сапҡынсы әҙерләгеҙ. Беҙгә лә ҡуҙғалырға ваҡыт. — Шунан Мөхәмәтшаға күҙ һалды. — Рәхмәт һиңә, ҡустым, ысын булһа, хәбәрең бик елле!

— Ысын, ысын, үҙ ҡолағым менән ишеттем, алдашыуҙан Аллам һаҡлаһын! — Мөхәмәтша нисек тә ышандырырға тырышты.

— Шулай ҙа ҡыйыу егетһең һин, һаҡсының винтовкаһын сәлдереп ҡас әле! — Хахылдашып көлдө былар.

Етди һорап ҡуйҙы командир:

— Ҡайһы ауылдан тинең әле?

— Кәпәй-Ҡобауҙан. Унда мулла мин.

— Кәпәй-Ҡобау бында ғына ята, үҙең генә лә ҡайтып етә алырһың, ҡустым.

— Етеүен етә алам да ул, таныш ерҙәр инде...

— Һуң, нишләп тораһың, ҡайтырға рөхсәт һиңә.

— Мине лә үҙегеҙ менән алығыҙ, атым да бар, мылтығым да. Йөҙөнә ҡарап төкөргөм килә шул аҡ эфисәргә.

— Шулай тиһеңме, теләгең бармы? — Ҡыҙыҡһынды командир.

— Шулай тим, теләгем бар. Теләгем генә түгел, үсем бар: беҙҙең этте атып йыҡты ул, «малайка» тип мыҫҡылланы мине. Мин инде өйләнер йәшкә еткән ир-егетмен, ун ете йәшемдең өҫтөнә баҫтым.

— Таҙа егетһең, ышанам. — Яурынынан ҡосаҡлап, үҙенә ҡыҫты командир. — Һинең кеүек ҡыйыуҙар оҡшай миңә.

Тағы берәүҙе саҡыртып алды был.

— Был егетте үҙеңдең отрядыңа ал, Хәкимов, беҙгә ҡушылырға теләк белдерә ул.

Хәкимов уны һалдаттары янына килтерҙе.

— Үҙегеҙҙең туғанығыҙ кеүек ҡабул итегеҙ, ҡыҙылармеецтар. Мәгәр, йәш һалдатҡа һанап, ҡыйырһыта ҡалһағыҙ... — Хәкимов һүҙен ослар-

ға ла өлгөрмәне, теҙелергә команда бирелде. Командир алда ниндәй маҡсат тороуын ҡыҫҡаса ғына аңлатып үтте.

Разведка ебәрә-ебәрә, ике көн барҙы ҡыҙылармеецтар. Сәрмәсәнгә яҡынлашҡас, сауҡалыҡ буйын биләп, һөжүмгә әҙерләнделәр. Китте бер мәл мәхшәр. Сәрмәсәндең теге яғынан да, был яғынан да дөмбәҫләйҙәр аҡ банданы. Ҡайҙа керергә урын тапмай, өйөрөлә-һуғыла аҡтар. Снарядтар ҙа яуҙырып бер аҙ иҙгеләгәс, ике яҡтан да һөжүмгә ташландылар. Ҡасып ҡотолоусылар булдымы — уныһы Мөхәмәтшаға ҡараңғы, әммә бик күптәрен әсирлеккә төшөрҙөләр. Шулар араһында теге эфисәр ҙә бар ине.

Мөхәмәтша юрамал тегенең алдынан үткеләп-һүткеләп йөрөнө. Битенә төкөрөргә баҙнат ҡылманы, уныһына рөхсәт тә итмәҫтәр ине, хәйер. Теге тотҡон эфисәр бүре һымаҡ теш ыржайтып ҡараны егеткә. Әгәр мөмкин булһа, сәйнәр ине, билләһи. Ул ҡарағанда, Мөхәмәтша батырҙарса һауалы тотто үҙен. Күрһен әйҙә кем арҡаһында тар-мар ителгәнен. Сыҙаша алманы эфисәр:

— У-ух!.. Белгән булһам әгәр... — тип ырылданы.

Мөхәмәтша отряд менән байтаҡ яу юлдары үтте. Айҙар артта ҡалды, йыл яҡынлашты. Төрлө өлкәләрҙе солғап алған граждандар һуғышы удмурт ерендә дауам итте. Сарапул ҡалаһы янындағы алыштарҙың уртаһында ҡайнашты. Ул хәҙер күпте күргән таҫыллы ҡыҙылармеец ине инде. Сарапул һуңғы фронт юлы булды: еңелсә яраланып, ҡайтарып ебәрҙеләр уны.

Кәпәй халҡы ҡолас йәйеп ҡаршыланы. Ата-әсәһенең, туғандарының шатлығын аңлатып тораһы ла түгел! Тәүге ҡыҙылармеец ине ләһә ул ауылда. Ҡайтыу менән яңынан кеше күңелен рухландырыусы, иман нурын өләшеүсе изге эшенә кереште ул.

Донъялар именләнә башланы. Граждандар һуғышының шаңдауы әллә ҡайҙарға, алыҫҡа — диңгеҙ, океан буйҙарына китеп юғалды. Инде Мөхәмәтшаға ла, кәләш әйттереп, үҙ донъяһын ҡорорға ваҡыт етте. Мөхәмәтшакир ағай менән Майкамал апайҙы ҡыуандырып, йәне тартҡанды һайлап алды. Мөхәмәтша мулла, абыстайын эйәртеп, Ҡөрьән аштарына йөрөнө, дини йолалар унһыҙ үтмәне. Абруйы үҫкәндән-үҫте.

Ауылда яңы ғаиләләр арта барҙы. Йорт һалып башҡа сығыу өсөн урын да тарая төштө. Шуға ла Кәпәй кешеләренең бер өлөшө, тормош өсөн уңайлы урын эҙләп, ситкә күсенде. Был яңы ауылды Уртакүл тип атанылар. Мулла итеп Мөхәмәтшаны һайланылар. Мәхәлләһе лә күркәм, муллаһы ла хөрмәтле, халыҡ ылыҡты ла ҡуйҙы шунда. Көр тауышы менән көйләп әйткән аҙандары ауыл өҫтөнә күңел елкетер моңдай таралыр ине.

Мөхәмәтша мәсеттә бер үк ваҡытта мулла ла, мәзин дә, мөтәүәлли ҙә вазифаларын башҡарҙы.

1930 йылдарҙа колхоз-совхоздар ойоштороу башланды. Совет власы тамырҙарын киң йәйеп, үҙ ҡанундарын индерҙе. Уртакүл ауылы ла совхозға әүерелде. Дингә ҡаршы көрәш көсәйеп китте. Нәҡ шул йыл-

дарҙа аумаҡайҙар мәсетте ябырға ҡарар сығарҙы. Дин, йәнәһе, кәрәк түгел, халыҡты ағыулай, кешене томана яһай.

— Клуб итеп файҙаланайыҡ беҙ был бинаны, — тиеүселәр ҙә табылды.

— Манараһын киҫеп төшөрәйек. — Ҡаныҡтылар бит шул мәсеткә.

Манараһын да ауҙарҙылар. Мөхәмәтша уларҙы тыйып маташты:

— Гонаһлы булмағыҙ, йәмәғәт, Хоҙай ярлыҡамаҫ үҙегеҙҙе, — тип араларына керҙе. Ситкә этеп кенә ебәрҙеләр ҡасандыр мөхтәбәр мулланы, һанға һуҡмай.

Ҡырғараҡ баҫып, күҙ йәштәрен ағыҙа-ағыҙа доғалар уҡыны Мөхәмәтша. Гөрһөлдәп манара ауғас, үҙе лә бөгөлөп төштө. Йә Алла, харап иттеләр бит, имандарын юйған әҙәмдәр! Айын ғына булһа ла алып ҡалайым, исмаһам.

— Айын миңә бирегеҙ, — тип ныҡышты Мөхәмәтша.

— Ал, әйҙә, беҙгә бер тингә лә кәрәге юҡ уның, — тине манара ауҙарыуҙа ең һыҙғанып йөрөгәне.

Айын эҙләргә керештеләр. Ҡарамаған бүрәнә аҫты ҡалманы. Ҡыҙыҡһынып, бөтәһе лә тирә-йүнде һәрмәп сыҡты.

— Юҡ бит, ҡайҙа булған шул арала?

— Ер йотҡандыр, — тиештеләр.

— Бәс, бәс, быны бер ғәжәп эш, ә!..

Айҙың күҙ менән ҡаш араһында юғалыуы шомға төшөрҙө ҡайһыларын.

— Хоҙай үҙе һаҡлаһын, зәхмәте һуғылмаһын әле тағы!

— Һеҙҙең ҡотортоуға килгән мин дүрәк, — тип, ҡул һелтәп, ҡайтыр юлына атланы өлкәнерәге. Уның артынан башҡалар эйәрҙе. Элекке мәсет тирәһендә бүрәнә-һерәнә әллә нисә ай туҙышып ятты. Клуб итергә теш ҡайрап йөрөгән комсомолдар ҡырғараҡ илтеп ташланы сүп-сарҙы. Оҙаҡламай, тубыҡланып намаҙ уҡыған иҙәндәрҙе дер һелкетеп, йәштәр бейеште, аҙан урынына әллә ниндәй төртмә йырҙар, таҡмаҡтар яңғыраны.

Быраса тиҫтәләгән быуаттар буйына Ер-әсәнең ярты халҡын тиерлек үҙе артынан эйәрткән ислам дине бер нисә йыл эсендә, совет власының бер һелтәнеүендә, юҡҡа сыҡты.

Муллалар дошманға әйләнде, уларҙың ҡайһы берҙәрен хатта әсир яһап Себергә оҙаттылар.

Мөхәмәтшаға һөргөн китер әсе елдәр ҡағылыуын ҡағылманы. Төшөнкөлөккә бирелмәне ул, башын түбән эймәне.

— Мин граждандар һуғышында сыныҡыу үткән кеше әле, бер эштән дә ҡурҡмайым, — тип, ҡайҙа ҡушһалар — шул эшкә йүгерҙе. Балаларының тамағы туҡ, өҫтө бөтөн икән — шуға хушһынды.

Һуғыштың тәүге йылдары Мөхәмәтшаны урап үтте.

— Олоғайғанһың инде, абзый, һинһеҙ ҙә дошманды еңерҙәр. Ана, ауылығыҙҙа ирҙәр ҡалманы ла тиерлек, булыш шунда, бер терәк бул, — тинеләр.

Ләкин ил яҙмышы ҡыл өҫтөндә — 1943 йылда уға ла повестка килтереп тотторҙолар. Майкамал апай иң өлкәнен һигеҙ улы араһында һуңғыһы итеп оҙатты фронтҡа.

Мөхәмәтша ла, ҡустылары әйткән һымаҡ, вәғәҙә бирҙе әсәһенә.

— Ҡайтырмын, әсәй, еңербеҙ шул ҡәһәр һуҡҡандарҙы!

Һигеҙ балаһын ҡалдырып, иллеһен ҡыуып барған ир-уҙаман шулай ил саҡырыуына ҡушылды.

Мөхәмәтша Ленинград фронтына эләкте. Пехотала иң өлкәндәрҙең береһе ине ул. Хәтәр бит был һуғыш, ер ярыла, хатта һыу ҙа яна. Ҡаланы алыу өсөн дошман көн-төн ут яуҙыра. Граждандар һуғышы уйын ғына булған икән. Әй әҙәми зат, ниңә бер-береңде шул саҡлы күрә алмайһың? Ғаләм йөҙөндә кеше ғүмере гөлтләп балҡыған осҡон саҡлы ғына, шул арала бер-береңде үлтер, ҡыйрат имеш. Бер көн эсендә меңәрләгән кеше теге донъяға китә... Ә ҡалала күпме гонаһһыҙҙар һәләк була. Ленинград урамдарында мәйеттәр тулып ятыуына иҫ-аҡылы китте Мөхәмәтшаның. Бомбалар, пулялар йәндәрен өҙә, унан да бигерәк аслыҡ ҡыра ленинградлыларҙы...

Ҡәҙерле ҡаланы 900 тәүлек буйына фашистарҙан һаҡлап, оборона тотҡан армия, башта аҙымлап, тора-бара саҡырымлап, һөжүмгә күсә. Ут-ялҡында ниндәй яҙмыш көтәһен бер кем дә юрай алмай: һалдат ғүмере көн эсендә генә түгел, сәғәт, минут эсендә өҙөлөргә мөмкин. Мөхәмәтша ла, изге доғаларын уҡып, һөжүмгә күтәрелде... Әсә ғаиләнән ил һағына киткән һуңғы яугир улы тураһында «ҡара ҡағыҙ» алды. Был — 1944 йыл ине.

## Әсә

Майкамал апай улдарын оҙатҡас, хат-хәбәр көтөп күҙ талсыҡтырҙы. Көн дә почтальонды һағалап, йә тәҙрәгә ҡапланды, урамға уҡ сығып ҡаршыланы. Ауыр моҡсайын иңбашына аҫҡан йәш ҡыҙ күренеү менән юлға атлыҡты. Уның ҡасан ҡайтаһын ятлап бөткән әсә.

— Беҙгә хат бармы, ҡыҙым? — Ҡабаланып һорай һала.

— Юҡ бит әле, әбей, — тип уңайһыҙлана хат ташыусы, әйтерһең ул ғәйепле яҙмағандарына.

Майкамал апай яңынан күңелһеҙләнә, йөрәге, ут өткәндәй, һыҙыпһыҙып ала.

Ҡыҙ әбейҙе йыуатмаҡсы:

— Яҙып өлгөрә алмағандарҙыр, ваҡыттары ҡыҫынҡылыр, килеү менән иң тәүҙә һеҙгә индерермен, — тип мөлдөрәп баға.

Әсә өмөтө бөгөн дә селпәрәмә килде. Нисек йыуаныс табырға, нисек көн үткәрергә? Көнө эш өҫтөндә үтер уның, ә төнөн, уй-хәсрәткә батып, күҙ аса-йома һиҫкәнеүҙәрҙең ауырлығын бер ни менән үлсәү мөмкин түгел.

Майкамал апай, башҡа ҡатын-ҡыҙҙар кеүек, колхоз йөгөн төпкө егеүҙә тартты. Ашлыҡ өлгөргәс, ҡул урағы менән усламлап, эҫе селләләргә, ҡойма ямғырҙарға бирешмәй, гектарлаған баҫыуҙа көлтә сүмәләләре ултыртты. Ямғырына ла, ыжғыр буранына ла түҙер инең әле, улдарынан хәбәр килмәүе йәнде яра. Ҡайҙа Закирым, ҡайҙа Ғилемем, Ғәйнелем ни хәлдә икән — һигеҙ улы яҡҡан һигеҙ усаҡтың ҡуҙҙары өтә йөрәк итен...

Мөхәмәтйәндән дә ни бары бер хат килде. Уныһы, яраланып, Себер яғында госпиталдә ятам, тигән. Нишләп Себерҙә ул, ни булған — ҡараңғы әсә өсөн.

Ауылға «похоронный ҡағыҙы» килеү йышайҙы. Уның һайын ҡайғы ташҡындары көслөрәк урғылды. Бер ғаиләне генә түгел, тотошлай ауылды һыҡтау баҫты. Хаҡ Тәғәлә бәндәһенә нисек шул саҡлы түҙем бирә алғандыр, әйтерлек тә түгел...

Әсә һаман хаттар көттө, ә улар юҡ та юҡ. Әллә барып белешергәме улдарын ҡайҙа ебәргәндәрен? Адрес бирһәләр, үҙе хат яҙҙырыр ине, былай тома һуҡыр һымаҡ йәшәп ятҡансы...

Шулай еңел уйлап, китте әсә районға, адрестарын алырына ышанып. Ҡалҡыулыҡҡа күтәрелгәс, шып туҡтап ҡалды. Бара ла ул, кемдән һорарға һуң, ҡайҙа әйтеп бирерҙәр улдары тураһында? Бөтәһен дә почтала беләләрҙер, шунда барырға кәрәк, тигән уй килде.

Ҡалҡыулыҡта ауылдың тирә-яғы бар байҡалышы менән күренеп ята. Ана урман буйынан сыҡҡан үҙән буйлап Ҡыйҙаш аға көмөш тулҡындарын тулғытып. Уның аръяғында — сабынлыҡтар. Колхоз төҙөлгәнсегә саҡлы уларҙың да бесәнлеге шунда була торғайны. Күмәк хужалыҡ барлыҡҡа килгәс, колхоз кәбәндәре биләне ул киңлектәрҙе. Туҡта!.. Мөхәмәтшакиры менән ныҡлап танышыуҙары нәҡ шул бесән өҫтөндә булды лаһа. Туҡмаҡ шишмәһенә һыу ала йөрөгәндә. Табыштырған, ҡауыштырған һыу буйҙары... Әй ғүмер, ҡайһылай алтын саҡтар үткән дә киткән тәгәрәп...

Майкамалдың күҙҙәре районға илткән юлға төбәлгән, ә ғәме йәшлек миҙгеленә, томра йәйҙә бесән әҙерләгән мәлдәргә барып тоташа.

...Көндөң ялҡындай ҡыҙыулыҡ бәргән сағы. Был миҙгелдә ауыл халҡы ҡырға — үҙенең бесәнлегенә күтәрелә. Төрлө ҡатлам кешеһенә — төрлө биләмә. Ул ваҡыттарҙа сабынлыҡ, йән башына иҫәпләп, бүлеп бирелер ине. Байҙар өсөн, ана, йылға үҙәндәрендә, урман буйҙарында ирәйеп ятҡан туғайлыҡтар! Байғураның тиҫтәләгән хеҙмәтсеһе шундағы һутлы үләндә салғыларын һелтәй. Уртаса хәллеләргә, ярлы-ябағайға тау-һаҙлыҡ урындар, ағас араһы ла ярап ҡала: ғаилә менән килеп, тирмә ҡороп, бер нисә көнгә өлөшөнә төшкән көмөшөндә төйәкләнә. Ул йылды Мөхәмәтлатип менән Ғабдрахман ғаиләһенә бербереһенә күрше һаҙамыҡ ерҙән эләкте сабынлыҡ. Көндөң төрлө сағында, айырыуса иртәнге, киске һалҡындарҙа саж-сож сыңлай ғына салғы тауыштары!

Мөхәмәтлатип та, Ғабдрахман да улдарын сабыуға ҡушҡан. Ҡатынҡыҙ тирмә ҡаҙаны тирәһендә, тәмле ит еҫен аңҡытып, аш-һыу менән булыша. Тәкәләрҙең бешеккән, иткә тығыҙланып, уйнаҡлаған сағы. Хәленән килгәндәр, бесән өҫтөнә тип, бер-ике тәкәне һимертеп тә ҡуя. Мөхәмәтлатип менән Ғабдрахман да төшөп ҡалғандарҙан түгел әле: ат, һыйыры бөртөклө булһа ла, һарыҡ-кәзәһе етерлек. Был юлы ла улар бесәнлеккә тәкәләр һалып килгән. Бейә һөтөнән булмаһа ла, кәзә һөтөнән ҡымыҙ ҙа бешә хужабикәләр. Хәйер, икеһенең дә ярҙамсылары кәмей төштө төшөүен, улдарының ҡайһы берҙәре үҙҙәренең донъяһын ҡороп,

башҡа сығып йәшәйҙәр хәҙер. Атаһының атында улының да уртағы бар, тигәндәй, ярҙамға килгеләйҙәр. Уның ҡарауы, береһендә — ҡыҙ, икенсеһендә ул буй еткергән. Тимәк, әле ғаиләлә көс бар, мөрхәтһенеп йәшәйһе лә йәшәйһе!

Бесәндәр сабылып, бакуйҙарға һалынғас, йыйып, кәбән ҡойғансы, бер-ике көн ҡул бушап ҡала. Мөхәмәтлатип иртүк тәкә салып, эш иткәндән һуң, ҡулын ыуғылап йөрөнө лә ҡымыҙ тәмләп ҡараны.

— Һай, ялан һауаһының шифаһылыр был, ҡымыҙы ла ҡымыҙы, һаумал ғына! Ҡана, мин Ғабдрахман ҡорҙашты ла саҡырып киләйем әле, бер ултырып алырбыҙ ирәйеп, — тип, ҡыуаҡлыҡтар ашаһындағы биләмәгә йыйынды.

Бер аҙҙан ҡорҙашын эйәртеп килеп тә етте. Мөхәмәтлатиптың ҡунаҡсыл, яҡшы күңелле икәнен ауылдаштары белә. Шуға ла Ғабдрахман саҡырыуҙы ихлас ҡабул итте.

— Әбей, әйҙә, күршеләрҙең хәлен белеп әйләнәйек. Эштең ауырлығы — беләккә, аштың татлылығы — йөрәккә, һөйләшә-серләшә ял итеп алайыҡ бер талай, — тип, йыйына ла башланы.

Зәйнәп тә өҫ-башын ҡараштырып, тирмәнән тиҙ әйләнеп сыҡты. Шул арала ҡыҙы Майкамалға йомош-булмышын ҡушып та өлгөрҙө.

— Алыҫыраҡ та ул, шулай ҙа көйәнтәләп Туҡмаҡ буйына барып ҡайт, ҡыҙым, сәйгә бигерәк йомшаҡ шул шишмәнең һыуы, һөт өҫтөнә ултырған ҡаймаҡ шикелле.

Мөхәмәтлатип та ҡолаҡ һалды Зәйнәптең әйткәненә.

— Ниңә тәпәйләп йөрөргә шул тиклем алыҫҡа, беҙ мискә алып килгәнбеҙ. Шакир улым ат егер ҙә елдереп барып та килер, — тине, ҡунаҡтарын тынысландырып.

Мөхәмәтшакирға был эш эшме ни, силәкләп һоҫҡан терегөмөш бит ул — атлығып атының йүгәненә барып та йәбеште.

Атаһы үҙенә генә юлланырға, ҡайтышлай ҡорҙашы тирмәһенә лә индереп сығырға ҡушһа ла, әле улар тиҙ ҡайтырлыҡ түгел, ит тә бешеп өлгөрмәгән, ҡымыҙ уртлап кәйефләнеп ултырырҙар онотолоп, тип, атын күрше сабынлыҡҡа борҙо. Мискә доңғорлатып килгән арбаға Майкамал башта һағайып ҡараны.

— Әсәйең бит бергәләп һыуға барырға ҡушты, тиҙ генә әйләнербеҙ, — тигәс кенә ҡыҙ силәктәрен арбаға ултыртты.

Һүҙҙәре берекмәне бер аҙға, икеһенең береһе тел сисә алмай. Егеттең күңеле ҡошсоҡ һымаҡ һайрап ебәрер төҫлө лә ул, көйөн таба алмағандай, өҙөлөп ҡала. Һиҙмәҫтән, урынһыҙ ғына һорап ҡуйҙы:

— Бесән эше арытып ебәрмәйме, һылыуҡай?

— Юҡсы, мин күберәк ҡаҙан тирәһендәмен инде, нимәһе арытһын уның.

— Башҡа йылдарҙа күренмәй инең шай, өйҙә ҡала торғайныңмы әллә?

— Ағайымдар эшләшә ине шул, кесе еңгәм менән мин — өйҙә. Бәләкәйерәк тә инем бит әле ул саҡта.

— Хәҙер үҫтеңме?

— Һы, буйға ҡарап уй йөрөтмә... Ағайымдар арғы оста өй күтәреп башҡа сыҡты хәҙер. Үҙҙәренең мал-тыуары, биләмәһе бар.

— Ярҙамға ярарлыҡ булғас, буйың еткән инде, улайһа.

Ҡыҙ үпкәләнеме егеттең ярым-ярты шаяртып әйтеүенә, башҡаса өндәшмәне, тел тешләне.

Туҡмаҡ шишмәһе имәнлек буйында. Тирә-яғы һыуһылланып, йәшел келәм шикелле йомшаҡ үлән ҡаплаған. Тәпәш кенә ярлауыҡтан сөмбөрләп саф һыу эркелә. Бына инде ул ысын терегөмөш! Һыу бөрсөктәре ҡояш нурында уйнап, күҙ яуын алырҙай йәйғор төҫөн сағылдыра.

Мөхәмәтшакир Майкамалдың силәген шишмә сығанағына терәне. Ниндәйҙер моңло, нескә көй ағылғандай, сың-сың килеп, силәк тула ла башланы. Мөлдөрәмә силәк күтәреп, Майкамалға һондо Шакир.

— Мә, эсеп ебәр, тәнгә сихәте тейер.

— Үҙең эс әле һыуһының ҡанғансы. — Силәкте этә биреп кенә ҡуйҙы ҡыҙ.

— Ярай, улайһа. — Мөхәмәтшакир, сарсаған тай һымаҡ, бер тынала әллә күпме һыу уртланы, теше ҡамашҡанын да һиҙмәне хатта. Ысынлап та, көн томраһына тынһып, тамағы кипкәйне уның. Ғолҡолдатып эсте лә усы менән күкрәген һыпырҙы, йәнәһе, бына ҡайҙа ул ләззәт!

Ҡыҙ ҙа томрап ҡараған силәккә.

— Хәҙер һинең сират, ҡатын-ҡыҙ затының баһаһы нисегерәк була икән?

Был юлы ялындырманы Майкамал, яңы тыуған айға оҡшатып ирендәрен бөгөп, силәк ситенә терәне. Ашыҡмай ғына бер нисә йотом яһаны.

— Әсәйем дөрөҫ әйтә шул, ҡаймаҡ тәме килгән төҫлө, — тип ҡуйҙы. — Рәхмәт һыу менән һыйлағаныңа!

— Шәрбәтем юҡ был юлы, һыйлағанда һыу булһа ла эс, тигәндәр. Кәнфит менән һыйлауҙы икенсе ваҡытҡа ҡалдырабыҙ. — Теле асылып китте егеттең.

Ҡыҙ уға силәген һондо. Шакир күнәккә ҡуша ҡыҫып уның ҡулдарын тотто. Уртала саф һыулы силәк, уны ҡыҫып ике яҡтан ике ҡул үрелгән, күҙҙәр, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, мөлдөрәп, бер-береһенә баҡҡан. Бына ҡайҙа ул татлы минуттар! Ошо килеш ғүмергә ҡалырға риза Мөхәмәтшакир, тик ҡара күҙҙәр аша күңел түренән эркелеп сыҡҡан нурҙар бер ваҡытта ла һүнмәһен-һүрелмәһен!.. Майкамал ни уйлай икән төш һымаҡ ҡына күренеп ҡалған был минуттарҙа...

Ҡулға-ҡул тотоношоп хәтһеҙ торғандан һуң, ҡыҙ, ҡапыл өркөп осҡан ҡыр ҡаҙылай ҡыйғаҡлап, устарын ысҡындырҙы.

— Ай, нишләйем был, күреп ҡалһалар!..

Силәк ысҡынып төшөп барғанда, Шакир үтә лә етеҙлек менән тотоп өлгөрҙө.

— Күңелгә ләззәт биргән һыуҙы түгергә ярамай, — тип, ишетелер-ишетелмәҫ һөйләнеп алды.

— Беҙҙе көтәләрҙер, мискәне тултырайыҡ инде. — Майкамал да иҫен йыйҙы.

— Хәҙер, мин һә тигәнсе эшләйем уны.

Мөхәмәтшакир, салбар балағын төрә биреп, һыу ташырға кереште. Йүгерә-атлай мискәне мөлдөрәмә итеп ҡуйҙы.

— Ултыр, һылыуым, алғараҡ, минең менән йәнәштә. Күлдәгеңде сылата күрмәһен һыу сайпылып.

Йәнәш ултырып, атты әкрен генә атлатып, улар тәүге тирмәгә килеп етте. Былар киткәндә тирмәлә ял итеп ҡалған Майкамалдың еңгәһе ауыҙ йырып ҡаршыланы.

— Атаҡ, килешеп тора парлашып ултырыуығыҙ!..

— Һин беҙҙе күрмәнең, еңгә, мин үҙем генә барҙым һыуға, — тине Шакир, ҡыйыуланып, — Майкамалды шелтәләрҙәр юғиһә.

— Юҡ, юҡ, күрмәнем... Күрергә яҙһа ла, бер ни ғәйеп булмаç... Икегеҙ ҙә пар килгәнһеҙ, тигеҙ ғүмер итегеҙ, — тип еңгә һамаҡлап та ебәрҙе. Алсаҡ, шаян һүҙле икән.

— Тиҙерәк ҡайта һал инде, Шакир әфәнде. — Ҡабаландырҙы Майкамал.

Мөхәмәтшакир тирмәгә ҡайтҡанда табындың шаулы-гөрлө сағы ине. Ғабдрахман ағай яурыны аша киндерҙән һуғылған семәрле таçтамал һалған, бөрсөк-бөрсөк тир баçҡан битен, елкәһен һөрткөләп ала. Әңгәмәләре лә береккән, күрәһең, һөйләшәләр ҙә көлөшәләр. Кәзә ҡымыҙы шулай илерткән, ахырыһы, уларҙы.

Мөхәмәтшакирҙы күреү менән Ғабдрахман ағай ҡолас йәйҙе.

— Ҡайттыңмы, улым, тиҙ әйләнгәнһең... Туҡта, үҙең генә барҙыңмы? — тип икеләнгәндәй итте.

— Үҙем генә... Ул шишмәнең ҡайҙалығын беләм дә ул мин. — Шакир күҙ ҙә йоммай яуапланы.

— Шәп, шәп, аçыл егеткә оҡшағанһың... Хәйер, егәрлេнең елегенә ел һуҡмаç, тиеүҙәре дөрөçтөр, күрәһең. Ҡабаланып, тирләп-бешеп бөткәнһең, — тине ағай кинәйәле генә.

Мөхәмәтшакир үкенеп тә ҡуйҙы: «Эх, белһәм, иркенләберәк, оҙағыраҡ йөрөләр ине!..»

Икенсе көндө, бакуйҙарҙы йыйырға әҙерләнеп йөрөгәндә, Ғабдрахман, атын елдертеп, быларға килде. Бөгөн кисәге шаянлығы әллә ҡайҙа юғалған, етди төç алған.

— Мин, Мөхәмәтлатип ҡорҙаш, уйлап яттым да, кәңәшкә килдем әле, әллә, мин әйтәм, кәбәндәрҙе ҡулалмаш эшләйекме? Берләшкән көстә — бәрәкәт, һиндә лә ат, миндә лә, һинең дә балалар, минең дә, бер көндә бер кәбәнде күккә сөйҙөрөп ултыртып та ҡуябыҙ уны.

Ғабдрахмандың тәкдиме Латипты ла ҡыҙыҡтырҙы.

— Бигерәк һәйбәт фекерҙәһең, ҡорҙаш, бергәләп еңелерәк тә, күңеллерәк тә буласаҡ.

— Киттек, улайһа. Кисәге тәмле һыуҙан сәй ҙә ҡайнаған, аш та әҙер. Ваҡытты уҙғармайыҡ.

— Ат ек, Шакир, һәнәк, тырмаларҙы йыйып һал, ос һәнәген онотма, — тип хәл дә итте Мөхәмәтлатип. — Әсәйең менән беҙ ҡорҙаштың ар-

баһына ултырабыҙ, һин ағайың менән килерһең. Килен менән Фәрхиямал ҡыҙым йәйләүҙә ҡалыр.

Күмәкләп тотонғас, бесәнлек өҫтө гөрләп китте. Ат арбаһының алғы күсәренә беләк йыуанлыҡтай һуйҙан һөйрәтмә эшләп, бесәнде тарттырыу йәшерәктәргә ҡушылды. Таҫыллы, тәжрибәлеләр, әлбиттә, бесән кәбәнләүҙә.

Шакир яңынан Майкамал менән йәнәшә эшләүенә һөйөнөп, Хоҙайға рәхмәттәр яуҙырҙы. Майкамал да бик ҡәнәғәт ине, буғай. Атаһын маҡтап алды:

— Беҙҙең атай төрлөһөн уйлап сығарырға ярата инде. Ул әйтмәһә, кемдең башына килер ине әле.

— Күңелсәклеге күренеп тора... Ҡарәле, Майкамал, һинән, һыуға барҙыңмы, тип һорашманымы?

— Юҡ, өндәшмәнеләр ул хаҡта. Әсәй генә, уратып-суратып, тиҙ әйләндегеҙ, тигән булды...

— Ә һин ни тинең?

— Һөйләшкәнсә инде, ләм-мим.

— Әсәй кеше — инә ҡаҙ, бәпкәләрен ҡанат аҫтына йәшерергә генә тора, — тип, Шакир шикләнеүгә нөктә ҡуйҙы.

Бөтәһе лә яйға һалынып, эш ҡыҙҙы. Бесән тейәлгән һөйрәтмәләр аллы-артлы кәбән янына ағылды. Килеп тора, яурынтаҡ, көслө беләкле атайҙар бер һөйрәтмәне бер-ике генә һелтәй. Кәбән өйөмө кеше буйы самаһына еткәс, өҫкә Мөхәмәтлатип менеп баҫты. Төшкә саҡлы бер һыуһын араһында кәбән яртылаш ҡалҡып та ултырҙы.

Төш ҡыҙыулығын күләгәлә үткәрҙеләр. Һалҡын һыу менән йыуынып, ашап-эсеп алғас, бер аҙ серем итергә лә форсат тыуҙы. Шакирға ҡалһа, йоҡоға һан юҡ, биләп һалһалар ҙа күҙен таҫрайтыр. Уның күңеле кисәге көндә — Туҡмаҡ шишмәһендә ине. Бөгөн һыу кәрәкмәй микән ни, ниңә өндәшеүсе юҡ? Уй тулҡыны икенсе күңелгә лә барып инеүе дөрөҫмө әллә, шул минутта тирмә тирәһендә табаҡ-һауыт менән булышып йөрөгән Зәйнәп апай Майкамалға өндәште:

— Һыу бөткән бит, ҡыҙым, нишләйбеҙ?

— Бөтһә, алырға ла килергә, — тине ҡыҙы, иҫе лә китмәй.

— Кемде ебәрәбеҙ һуң?

— Үҙем барам, ат егәм дә.

Һикереп торҙо Мөхәмәтшакир:

— Мин барам. Ҡыҙҙарға һыулы силәкте мискәгә бушатыу ауырға төшә.

— Ә һин ҡайҙан беләһең? — тип һынаулы ҡараны бер сама Зәйнәп апай.

— Күргәнем бар.

— Улай икән... Икәүләп барығыҙ, әләйгәс, берегеҙ алып торор, икенсегеҙ һалып торор.

Майкамал, уңайһыҙланып, яурындарын һикерткеләне.

Йоҡомһорап ятҡан Ғабдрахман ағай барыһын да төш аралаш өн итеп күрәме:

— Барығыҙ, барығыҙ, тик кисәге кеүек оҙаҡламағыҙ, йәһәтерәк әйләнегеҙ,— тип мығырланы.

Мөхәмәтшакир атын егеп тә ҡуйҙы. Уларҙы бер яҡ ситтән күҙәткән Майкамалдың еңгәһе, серле йылмайып, эйәк ҡағып ҡалды.

Был юлы ла моңло шишмә тауышына ҡушылып, сөңгөр-сөңгөр һөйләшә-һөйләшә, мискәгә һыу тултырҙы ҡыҙ менән егет. Уртаҡ хистәр урғылғандыр, бәлки, уртаҡ яҡынлыҡ тыуҙы улар араһында. Ҡайтышлай йәнә йәнәш ултырҙылар. Шакирҙы түбәһенән аяҡ осона саҡлы ниндәйҙер ипкен биләп алды. Йөрәге ярһып сығарҙай булып тибә. Ҡыҙҙың да, өндәшмәй генә килһә лә, бит остары ҡып-ҡыҙыл. Үбеп алһаң ине лә бит ҡыҙарып бешкән еләктәй бит остарын!.. Юҡ, ярамай. Шакир үҙенүҙе тыйып, шулай ҙа ҡыҙҙың ҡул һыртына бармаҡтарын тигеҙҙе. Өндәшмәне Майкамал, һиҙмәгәнгә һалышты. Шулай күпмелер барғас, усын һалды. Бында ла ҡыҙ ҡымшанманы. Артабан усын уска әйләндереп, ҡыҫып тотто. Ҡыҙ ҙа йомшаҡ ҡына ҡыҫып ҡуйҙы. Донъя тик улар өсөн генә яралғандай хис итте егет. Әгәр ошо ҡыҙ ҡулдарын һоноп иҙел аръяғына саҡырһа, иҙел кисергә лә әҙер ине ул! Йылы ус тотоп барыу менән генә үҙһенмәне Шакир, бигерәк ташҡайны шул әҫәрләнеүе, ҡулын күтәрҙе лә, ҡапыл ғына ҡыҙҙың яурынынан ҡосоп, үҙенә тартты. Әле генә майҙай иреп барған Майкамал бөршәйә биреп, терпе балаһылай тырпайҙы. Әйтерһең, күренмәгән йөҙәрләгән энә сәнсте Мөхәмәтшакирҙың беләген. Ҡулы секунд эсендә ҡайырылып төштө.

— Ни ҡыланыуың был, ә? Мин һине йүнле егет икән тип йөрөһәм... Туҡтат атты, мискә артына ултырам. — Майкамал дилбегәгә үҙе үк йәбеште. — Тр-р!..

Ат туҡтар-туҡтамаҫтан мискә артына боҫто ҡыҙ. Үкенес кисерҙе Шакир: ниңә улай ҡыланды икән...

Ҡыҙҙың артҡа күсеп ултырыуы ла һәйбәт булды әле, ҡайтыуҙарына Ғабдрахман ағай менән Зәйнәп апай, бәзрәйешеп, юлға арҡыры баҫҡандар.

— Етеҙ йөрөнөгөҙ быныһында, — тине Ғабдрахман ағай, тел төбөндә ниҙер йәшереп.

Төштән һуңғы эш тә ҡыҙыу барҙы. Мөхәмәтшакир менән Майкамал бер-беренә яҡын эшләһә лә, һүҙҙәре берекмәне. Ҡыҙ баш баҫып, турһая биреп, йүгерә-атлай үтә лә китә. Нисек бының күңелен асырға, тип әллә ниндәй хәйләләр ҡорһа ла, яңылыш тағы ла нығыраҡ асыуландырыуҙан ҡурҡып, егет уйынан кире ҡайтты. Ҡыҙ күңеле ҡырҡҡа бүленгән ҡыл, береһен генә өҙһәң дә ялғауы ҡыйын икәнен төшөнә ине ул. Ваҡыт кәрәк, ваҡыт ялғай ул бөтәһен дә — шулай фекер йөрөттө егет.

Кискә табан кәбән ҡойолоп бөттө. Уратып кәртә лә ҡоролдо. Ҡырҙа йөрөгән мал-тыуарҙан һаҡлау өсөн быныһы.

Бөтәһен дә тамам ҡылғас, Ғабдрахман ағай, бер нисә аҙымға ҡырғараҡ китеп, кәбәндең түбәһенән төбөнәсә буйлатып ҡарап торҙо.

— Һәй, дан килен сыҡҡан бит, ҡорҙаш, туй алдынан ҡупшы итеп кейенгән, сәстәре бөхтә таралған ҡыҙмы ни, ха-ха!.. — Кинәнеп көлдө Майкамалдың уйынсаҡ күңелле атаһы. Бөтәһе лә ҡәнәғәт ине бөгөнгө өмәнән.

Икенсе көн Мөхәмәтлатиптың бесәненә дәррәү тотондолар. Был юлы төшкө ялда Шакирҙың ағаһы китте һыу алырға. Өлкәндәр тағы күләгәгә инеп ҡунаҡланы. Йәштәр бер тегеләй, бер былай һуғылып йөрөнө лә, Майкамалдың еңгәһе өндәүе буйынса, урман буйын ҡыҙырып сығырға ҡарар итте.

— Унда еләк шәп, бөрлөгән өлгөргән, — тип ҡыҙыҡтырҙы еңгә.

Әлеге аңдып ятҡан Ғабдрахман ағай һүҙ ҡатты:

— Барығыҙ, бар, еләкләп сәй эсербеҙ.

Еләктең күплеген әйтерең бармы, турғай башы ҙурлыҡ, үләнде айырып ҡараныңмы — тәгәрәп ята! Бөтәһе лә сүгәләп, кемуҙарҙан йыя башланы. Тик Шакир ғына былай йөрөүҙе өнәмәне, сауҡалыҡҡа инеп китте. Хәтһеҙ ваҡыттан ҙур ғына тәлгәш бөрлөгән йыйып сыҡты. Бер яҡ ситтәрәк ултырған Майкамал янына килде.

— Бына һиңә минән күстәнәс, — тине егет, емештәр һоноп.

Башта Майкамал битараф ҡына ҡараш ташлағайны, шундай матурлыҡты күреп, йәнләнеп китте.

— Уй, ҡыҙыл мәрйен һымаҡ та был!

— Был мәрйендәр — һиңә, кәрәк икән, йыям да килтерәм. — Мөхәмәтшакир ҡыҙҙың күңеле күтәрелеүгә ҡыуанып ҡуйҙы.

— Тағы ла ҡалдымы ни?

— Күп унда!

Ишетеп йөрөгән Шәмсиниса еңгә баш ҡалҡытты.

— Бөрлөгән ул бер генә түгел, мең дауа, бик файҙалы. Ҡәйнебикәс, һин дә йый, — тип Майкамалды ла ҡыҙыҡтырҙы.

— Йыяйым һуң, — тине ҡыҙ, баҫалҡылыҡ белдереп.

— Урман буйында бер үҙеңә ҡурҡыныс булыр, икәүләп барығыҙ.

Ошо һүҙҙе ишетергә теләп, күптән ымһына ине инде Мөхәмәтшакир. Егет менән ҡыҙ бер-береһенә ҡараштты. Ҡараштар ҙа тел кеүек бит, күпте аңлата. Былар өндәшмәй генә сауҡалыҡ ҡосағына атланы. Еләҫлек тә, иләҫлек тә, йәнлелек тә — барыһын да йыйған икән был сауҡалыҡ үҙенә!

— Бына бында бөрлөгән бер-береһенә үрелгән! — тип ҡысҡырып ебәрҙе Майкамал асыҡ тауыш менән.

Мөхәмәтшакир бер-ике һикереүҙә бейек ҡайын төбөнә килеп баҫты.

— О-һо, матурлығы, эрелеге, өҙөүе лә йәл хатта!

— Хоҙай ризыҡ итеп биргән уны, беҙ йыймаһаҡ, барыбер ҡойоласаҡ.

Ҡайындың ике яғына сүгәләп, күпмегәлер тын ҡалды улар. Бөрлөгән тимәҫһең хатта, усты өтөп барған тере ҡуҙ! Ялҡынлап-йылҡылдап осҡонланғандай.

— Мин бер ус йыйып та алдым бына, әйҙә, һинең тырызға һалайыҡ, — тип Мөхәмәтшакир аяғүрә баҫты.

Майкамал да күтәрелде. Ҡайын олонон уратып, тырызын һондо. Икеһе ике яҡтан ҡосто ҡайынды. Ап-аҡ туҙға сикәләрен терәне. Әллә кисәнән бирле болоҡһоп йөрөүҙең томанын ҡайын олоно өҫкә, күҙгә күренмәҫ бейеклеккә тарата микән?..

Мөхәмәтшакир телгә килде:

— Кисәге өсөн ғәфү ит инде, һылыуҡай! Мин ни... мин ни, яңлышҡанмын, башҡаса улай эшләмәм.

— Бөрлөгән дә, ана, көнө еткәс кенә өлгөрә, — тип ҡуйҙы Майкамал.

— Онотайыҡ кисәгене, үпкәләшмәйек, йәме. — Мөхәмәтшакирҙың йөҙө яҡтыра барҙы.

— Кисәгенән иртәгәһе ҡәҙерлерәк, шуныһын онотмайыҡ.

Ҡыҙҙың был һүҙҙәре, йәрәшергә лә ризамын, тигән һымағыраҡ тойолдо Шакирға.

— Әйҙә, йыяйыҡ бөрлөгәндәрҙе, күңелгә хуш килгәндәрҙе, — тип әҫәрләнде егет.

Улар йүгерә-атлай, эйелә-һығыла тырыз тултырғас, еләклеккә ыңғайланы. Шәмсиниса еңгә йылмая-көлә ҡаршыланы.

— Ҡалдымы әле тағы бөрлөгән?

— Бар әле йыяһы, бар, — тип мәғәнәле генә яуапланы Мөхәмәтшакир. — Һинең менән абзыйға ла етерлек унда...

Бесәнселәрҙе ҡыуандырып, бына тигән яңы һый ҡуйылды ашъяулыҡ өҫтөнә. Әйтеп тораһы ла түгел, бөгөн дә кәйефтәр шәп, ел-ямғырға юлыҡмай ғына бына тигән кәбәндәр ҡойоп ҡуй әле, ни кәрәк тағы!..

Эштәр көйләнде, ҡышҡа әҙерлек яҡшы үтте. Тағы ла шәберәге көҙгә, һуғымдар ваҡытына барып терәлә. Бына шул саҡта була инде байрамдар, һый-хөрмәт эсендә ҡунаҡҡа йөрөшөүҙәр!

Мөхәмәтшакир менән Майкамалдың осрашыу урыны билдәле инде — Ҡыйҙаш буйы, баҫма. Кеше-фәлән булмағанда һөйләшеп, күҙ-ҡараш менән аңлашып йыуаныс табалар.

— Һин ҡыҙҙар кеүек була башланың әле, ҡәйнеш, көн дә һыуға сығаһың да китәһең, — тип көлә еңгәһе.

— Һинең билең ауыртмаһын, еңгәм, ярҙамлашайым, тим.

— Кемдең — биле, кемдең йөрәге һыҙлай, һиҙелеп тора, ҡәйнешкәйем. — Сыңғырҙатып көлә еңгә. — Беҙ башҡа сыҡҡас нишләрһең икән инде.

— Һеҙ башҡалағансы, байтаҡ заман үтер әле, йортоғоҙ ярты-йорто ғына лаһа.

— Юҡ шул, сыуаш оҫталарын яллағанды беләһеңдер, улар ҡар төшкәнсе өлгөртәбеҙ тип сәмләнеп йәбеште.

— Бирһен Хоҙай, өй туйларбыҙ. — Мөхәмәтшакир ҙа ауыҙ йыра, эстән үҙе тиҙерәк сығыуҙарын теләй.

— Амин, шулай булһын! Ҡарт килен тарһындыра, йәш килен йәм өҫтәй, тигән кеүек, был йорттоң күңеле иркен, буш тормаҫ әле.

— Нимәгә юрайһың, еңгәй, төрттөрөп? — Аптыраған булды Шакир ҡәйнеше.

— Мине һуҡыр тиһеңме әллә?.. — Еңгәй тағы ла шарҡылдап көлдө.

Шулай итеп, Мөхәмәтшакир менән Майкамалдың осрашыуы ауыл ғаләменә лә билдәле ине инде.

Ҡыш килде, тирә-яҡ сафланып, аҡ нурға күмелде. Ошо миҙгелдә ағаһының өйө төҙәлеп бөтөп, ауылды йәмләне. Алаһын алып, оҫталары ла ҡайтып китте. Ул йортто эшләшеүҙә Шакир ҙа тырышып ҡатнаш-

ты. Тырышлығы юҡҡа ғына түгел ине уның, Майкамалдың ҡолағына төшөрөп тә ҡуйғайны:

— Ағайымдар башҡа сығыу менән яусы ебәрермен. Һин ризамы һуң?

Майкамал йөҙөн ҡаплап ябынған шәлен аса биреп, һутланып бешкән сейәләй алһыу ирендәрендә йылмайыу уйнатты.

— Ашыҡмай тор, ашы өлгөрһөн әле.

Күнәктәрен бәүелтә-бәүелтә китеп тә барҙы ҡыҙ.

Ашы ла өлгөрөр оҙаҡламай, ағаһының өйөнә мейес кенә сығараһы ҡалды, тип хыялға күмелде Шакир.

Мейес сығарыуҙы ла тиҙләттеләр. Йәй көнө үк кирбес һуғып ҡуйғайнылар инде. Мейес оҫтаһы эҙләп йөрөйһө юҡ, Мөхәмәтлатип үҙе ҡойоп ҡуя. Ярты ауылдың мейесен ул сығарған, яҡын-тирәләрҙән дә килеп алып китәләр хатта.

Көтә торғас, өй ҡотлау мәжлесе лә етте. Барлыҡ туған-тыумаса, дуҫиш йыйылды. Мөхәмәтлатип Ғабдрахман ҡорҙашы менән Зәйнәп ханымды ла саҡырыуҙы кәрәк тип тапты.

— Бергә эшләп, дуҫлашып бөттөк бит инде, дөрөҫ уйлағанһың, ҡартым, Ғабдрахмандарҙы саҡырып. — Хупланы Алтынбикә. — Тағы бер һөйләшеп ултырырбыҙ сутылдашып.

Хөрмәтле ҡунаҡтар рәтенән, иң түрҙән урын бирҙеләр уларға. Быға эй ҡанатланды ҡорҙашы, бөтәһен дә ауыҙына ҡаратты.

— Яңы өйөгөҙ яҡты, ашығыҙ татлы булһын! Һуңынан да бергә-бергә йәшәргә яҙһын! — Матур-матур теләктәр теләне.

— Шулай булһын, һм, эйе.

— Булырға тейеш тә ул.

— Ғабдрай — ҡыҙ, Латип ул еткергән, бәлки, ҡоҙалашырһығыҙ ҙа әле, — тип өҫтәне күрше Усман ҡарт.

Ғабдрахман менән Мөхәмәтлатип ҡапыл ғына ҡарашып алды.

— Һин, Усман уҙаман, үҙ белдегеңә яусы булып йөрөйһөңмө әллә? — тип һорап ҡуйҙы Ғабдрай.

— Беҙгә бер ни мәғлүм түгел, юҡ хәбәреңде таратма әле, күрше, — тине Латип та, үпкәләгәндәй.

— Мин ни, былай ғына... Өйөңдәге хәлде күршеңдән һора, тигәнгә яуап итеп кенә әйтәм. — Аҡланды Усман, артыҡ һүҙ ысҡындырыуына уңайһыҙланды.

Артабан мәжлес һәүетемсә барҙы. Туғандар, йыйылышып, йәш ғаиләгә һыйыр бүләк итергә насипланы.

— Беҙ ҙә аҡ һарыҡ инләнек, төклө аяғын төрттөрә-төрттөрә килтереп бирербеҙ, — тине Ғабдрахман, тауышты баҫып.

— Һеү, йортоғоҙға бәрәкәт ҡунһын! — тип хупланы башҡалар.

Мәжлес оҙаҡ дауам итте. Шакир ҡунаҡтар араһында үҙе ултырмаһа ла, ағаһына, еңгәһенә булышып инә-сыға йөрөгәндә фәһемле һөйләшеүҙәрҙе эсенә йота барҙы. Уға ла өйрәнә торорға кәрәк бит. Әллә күпме йор һүҙҙәр, мәрәкәләүҙәр, аҡыл һатыуҙар ишетеп өлгөрҙө егет.

Ҡайтырға йыйыныуҙар башланғас, атаһы Шакирҙы саҡырып алды.

— Бар, улым, ат егеп, Ғабдрахман ҡорҙаш менән Зәйнәп ханымды илтеп ҡуй.

Шакирҙың аяғы ергә лә теймәй, ләжәнкәле сананы ҡапҡа алдына килтереп тә ҡуйҙы. Ғабдрахман, килештереп, бик баһалы рәүештә, әбейен йәнәш ултыртып алды.

— Әйҙә әле, улым, теге урамдан уратып алып ҡайт, табында оҙаҡ ултырып, тын ҡыҫылған, саф һауа һулап барайыҡ, — тине Шакирға.

Мөхәмәтшакир атын икенсе урамға борҙо. Йылдам туры бейә, ҡар бураны туҙҙырып, ҡапҡаға тейә яҙып килеп туҡтаны. Тәҙрәнән ҡарап торғандыр, күрәһең, елпенеп Майкамал сыҡты. Әсәһенә сананан төшөргә булышты. Шул ике арала, ҡыйғас ҡашын күтәрә биреп, Шакирға һирпелде. Егет тә мәғәнәле итеп күҙ ҡыҫырға өлгөрҙө: эштәр көйлө, йәнәһе.

Мөхәмәтлатип өйгә ҡайтҡас, йәм тапмағандай, бер тегеләй, бер былай аяҡһыны. Өй эсе буш һымаҡ уға. Ишле йәшәп өйрәнгәнгәлер инде. Улына ла баш бороп алды, ләкин бер һүҙ ҡатманы...

...Хәтер ҡумтаһын аҡтара-аҡтара, юл оҙонлоғон да һиҙмәй ҡалды Майкамал апай. БыҒаса почтаға килеп йөрөмәгәс, уның ҡайҙа икәнен белмәй, урам уртаһында туҡталды. Тәүге осраған кеше үк почта йортон күрһәтте. Инеп, бер ҡатындан һорашты.

— Хаттарҙы ҡайҙан алалар?

— Анау бүлмәлә, апай, почтальонда була.

Ишек асыу менән эстәге ханым текләп ҡараны.

— Әллә һеҙ яңы почтальонмы, ҡайһы ауылдан?

— Мин Кәпәйҙән, ҡыҙым, хат юҡмы икән тип килдем.

— Үҙегеҙҙең почтальон бар бит һеҙҙең, килтермәйме ни?

— Булғанын бирә лә ул. Һуңғы ваҡытта фронттағы улдарымдан хәбәр ала алмайым. Ҡайһы тарафтарҙа йөрөйҙәр икән, шуны белешмәмме тигәйнем.

Почтала эшләүсе ҡыҙ аңлар-аңламаҫ хәлдә тыңланы апайҙы.

— Уларҙың ҡайҙалығын беҙ белмәйбеҙ шул, апай, эшебеҙ — хаттарҙы бүлеп биреү.

— Кем белә икән һуң уны?

— Райондың хәрби комиссариатына барып ҡарағыҙ, бәлки...

Ҡыҙ һүҙен өҙҙө, һаташып йөрөгән апай йәл булып китте уға. Бына нишләтә бит һуғыш әсәләрҙе, тигәндәй, уйланды.

— Комиссариат бынан күренеп тора, ана, урам аша ғына.

Майкамал апай ҡыҙ күрһәткән йортҡа йәһәтләне.

Унда тыңланылар ҙа, баш сайҡанылар.

— Апай, улдарығыҙҙың ҡайһы фронтта икәнен әйтә алмайбыҙ. Беҙҙә уларҙың адрестары булмай.

Хәрби кеше бик әҙәпле һөйләште, ҙур яҙманы асып, оҙаҡ ҡына тикшерҙе.

— Улдарың тураһында хәҙергә хәбәр юҡ. Борсолмағыҙ, ҡайтып ял итегеҙ, апай, — тип оҙатты йәш хеҙмәткәр.

Борсолмай буламы инде, бушҡа юл тапау ғына ҡалды. Арып-талып ҡайтып йығылды әсә өйөнә.

*(Дауамы киләһе һанда)*